✓ *...Иң аҡыллыһы ошондай ауыл хужалығы алымы булыр: яҡшы климат булдырығыҙ, тейешле ашлама менән тәьмин итегеҙ һәм кешеләргә үҙҙәренсә үҫтерергә мөмкинлек бирегеҙ. Быны шул саҡта улар һеҙҙе аптыратасаҡ.*

*(Макгрегор)*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17 - 23 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №16 (382)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Эшһеҙһеңме?**

Үҙ эшеңде ойоштор!



5

**Беҙ - татар булып бөтмәгәндәр,**

башҡортлоҡтан китмәгәндәр...



8-9

**Һиҙиәтовтар, тип әйтеү етә...**

улар хеҙмәтенең баһаһын билдәләү өсөн



12

**Хаж ғәмәле...**

ниәт ҡылыуҙан башлана...



15

14 ТВ-программа


## АСЫЛЫБЫҘ - БАШҠОРТ!

# КИЛӘСӘКТЕ ТОҠАНДЫРЫР ӨСӨН...

## үткәндәрҙең көлөнән ҡуҙ эҙләйем...

**Гәзитебеҙҙең был һаны Илеш төбәгендә йәшәүсе, башҡортлоғон таныған һәм танымаған милләттәштәребеҙгә арнала. Илештәргә башҡортлоҡ, милли рух тураһында үҙ яҡташтары өндәшә. Тәүге һүҙ - Яппаров Хажғәле Муллағәле улына. Ул 1929 йылдың 28 февралендә Илеш районының Иҫке Дөмәй ауылында тыуып үҫкән. 1947 йылда тыуған ауылында урта мәктәпте тамамлағандан һуң, "Биш партизан" колхозында иҫәпсе-хисапсы булып эшләй. 1954 йылда Башҡортостан ауыл хужалығы институтын ҡыҙыл дипломға тамамлай. 1967 йылда ошо уҡ институтта иҡтисад фәндәре буйынса кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлағанға тиклем республиканың төрлө райондары ауыл хужалығы предприятиеларында зоотехник, колхоз рәйесе, белгес булып эшләй. Артабан хаҡлы ялға киткәнсе ул Башҡортостан ауыл хужалығы институтында уҡыта. Доцент, ҡошсолоҡ тармағын үҫтереү, ауыл хужалығында эске хужалыҡ иҫәбе алып барыу һәм идара итеү буйынса 120-нән ашыу фәнни хеҙмәттәр һәм мәҡәләләр авторы. Хажғәле Муллағәле улы Башҡортостандың атҡаҙанған иҡтисадсыһы, РСФСР-ҙың юғары мәктәп отличнигы. Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында илебеҙҙә милли аң үҫеше, яңырыу хәрәкәте башланғас, ул беренселәрҙән булып был хәрәкәткә ҡушылды, уның тынғыһыҙ һәм әүҙем ағзаһы булды, үҙенең Йылан ырыуы башҡорттары хаҡында "Беҙҙең шәжәрә" тигән китабын яҙҙы. Китап 1999 йылда Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә донъя күрҙе. 2006 йылдың 28 ноябрендә Хажғәле Муллағәле улы беҙҙең аранан китте, ғүмеренең аҙағынаса үҙ асылына, гуманлылыҡ принциптарына тоғро булып ҡалды. Түбәндә беҙ уның китабындағы ҡайһы бер фекерҙәренә туҡталмаҡсыбыҙ.**

### Был ҡырағайлыҡ түгелме ни?

Кеше үҙенең ете быуынын белергә тейеш, тиҙәр. Һуңғы ваҡытта беҙҙә үҙенең ниндәй милләткә, ниндәй ырыуға ҡарағанын белмәгән бер нисә быуын манҡорттар үҫеп етте. Был ҡырағайлыҡ түгелме ни? Был күренеш, бәлки, ҡырағайлыҡтан да насарыраҡтыр. Был йәһәттән мин Л. Репиндың "Комсомольская правда"(1985) гәзитендә баҫылған "Кәтәгәҙ, мин ҡайтырмын" тигән мәҡәләһендә һүҙ барған бер ғибрәтле ваҡиға хаҡында һөйләмәйенсә булдыра алмайым. Мәҡәләлә Һиндостан тауҙарында һәм джунглиҙарында көн итеүсе ҡәбиләләр араһында ете йыл самаһы йәшәүсе сәйәхәтсе ғалимә Шапошникова Людмила Васильевна хаҡында һүҙ бара. Бәхетиһән, был ҡәбилә халҡы электр энергияһы, машиналар, хатта тәгәрмәс хаҡында бер нәмә лә белмәй икән.

Бер мәл ғалимә тодо ҡәбиләһенең оло йәштәге ҡатыны Тайсынпуф менән уның ата-олатайҙары, шәжәрәһе хаҡында әңгәмәләшә башлағас, Тайсынпуф үҙенең ете быуынға тиклемге атай-олатайҙарын бер тынала һанап сыға. Ғалимә ҡатындан тодо ҡәбиләһе халҡының хатта ун ике быуын атай-олатайҙарының исемдәрен яҡҡа белеүе хаҡында ла ишетә. Тайсынпуф ҡәбилә йолаһы буйынса Людмиланың да яуап итеп үҙенең шәжәрә ебен әйтеп үтеүен көтә. Әммә Шапошникова үҙенең ҡартатаһының һәм ике туғандарының исемен әйткән саҡта уҡ буталып, артабан бер нәмә лә әйтә алмайынса, туҡталып ҡала. Был хәлдән Тайсынпуф тетрәнеү тойғоһо кисерә һәм тодо ҡәбиләһенең йәше-ҡарты барыһы ла Людмиланы аҡыл йәһәтенән артта ҡалған кеше тип иҫәпләп, уны ҡурсаларға, ашатырға-эсерергә, һәр яҡлап бағырға тотона. Ҡәбилә халҡы бер нәмәгә аптырай: аҡылы камил кеше ете быуынын белмәҫкә мөмкинме икән? Бәхетиһән, был хәл бик мөмкин икән. Әммә ундайҙар таш быуатта түгел, ә беҙҙең менән бер заманда, бер цивилизацияла йәшәүселәр араһында.


**(Дауамы 4-се биттә).**


*Ринат ХӘЙРИ*



**Яҡты донъянан йәшләй генә киткән талантлы шағир, Ғ. Сәләм исемендәге премия лауреаты Ринат Хәйри (1950-1990) республикабыҙҙың төньяҡ-көнбайышында тыуып үҫкән ҡайһы бер әҙәбиәт һәм сәнғәт әһелдәре кеүек борғоланманы, һуңғы һулышынаса милли рухыбыҙға тоғро булып ҡалды.**

### Илдәштәргә ялбарыу

Кешеләрҙә кешелеклек,
Әҙәп, намыҫ юғалды.
Иманыбыҙҙы яңыртһын -
Уятығыҙ Уралды!

Айырмай дуҫты дошмандан,
Килмешәктән - туғанды;
Батырҙары вағайҙылар -
Уятығыҙ Уралды!

Ҡарағайҙар ҡайғыһы
Ҡайындарға уралды.
Ағиҙелен быуҙырмаһын
Уятығыҙ Уралды!

Урал сыҡһын башҡорт ерен
Олатайҙар ораны,
Аманатын ҡабатлаһын -
Уятығыҙ Уралды!

Йәне түҙмәҫ, күрһә әгәр
Иле-теле ҡороғанды;
Аҡбуҙатына атланһын -
Уятығыҙ Уралды!

Ҡындан һурып алһын да ул
Ҡурай тигән ҡоралды,
Моңһоҙҙарға моң әләшһен -
Уятығыҙ Уралды!

Сабып өҙһөн Битарафлыҡ
Тигән ҡара йыланды;
Тел асҡыстарын ҡайтарһын -
Уятығыҙ Уралды!

Бөркөттәрен, шоңҡарҙарын
Сөйһөн күккә, юғары;
Иманыбыҙҙы яңыртһын -
Уятығыҙ Уралды!

### Ҡурай

Мәшһүр ҡурай! Һин бит тәү ҡарашҡа
Тауҙа үҫкән ябай бер үлән.
Моңло халҡым минең шул үләнгә
Йөрәгенән алып йән өргән.

Һөйләгән ул бары уға ғына
Бар яҙмышын, бөтә моң-зарын,
Бар өмөтөн, яҡты хыялдарын,
Бар тарихын, бөтә булғанын.

Ишеткәнен йәки кисергәнен
Йыйып килгән күпме быуаттар.
Һәм уларҙы күҙ ҡараһы кеүек
Һаҡлап килгән. Халҡым йыуатҡан.

Байрамдарҙа ҡурай күнел асҡан,
Байрамдарҙа ҡурай бейегән.
Яҡты киләсәккә өмөт уты
Тоҡандырған дәртле көйөнән.

Был киләсәк - беҙгә ысынбарлыҡ,
Тормош - симфония. Шулай ҙа
Музейҙарҙан урын әҙерләргә
Ашыҡмайыҡ әле ҡурайға!

✓ *Спортта рух көсөнөң нимәгә һәләтле булыуын Параолимпия уйындарында башҡорт егете Ирек Зарипов күрһәтте. Донъя алдында беҙҙең милләтте бер башҡа күтәрҙе, данға күмде.*



ПАРАДОКС

# "САЛАУАТ ЮЛАЕВ" НИҢӘ ЕҢЕЛДЕ?

## Сөнки уның Салауат рухы булманы…

**"Салауат Юлаев" хоккей командаһының Ҡаҙандың "Аҡ барыҫ"ынан еңелеп, супер уйындан төшөп ҡалыуын бигерәк тә балалар һәм үҫмерҙәр ауыр кисергән икән. Был хәл, беренсенән, хоккей уйынының массовый милли аңды күтәреү буйынса ҙур мөмкинлеккә эйә булыуы хаҡында һөйләй. 2008 йылда "Салауат Юлаев"тың Рәсәй чемпионы исемен яулаған көндәрҙе генә хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ. Баш ҡаланың һәм республиканың төрлө милләт вәкилдәрен тәшкил итеүсе миллиондарса халҡы ул көндәрҙә ҙур рухи күтәренкелек менән "Салауат - чемпион" тип, командаға, Салауат батырыбыҙға зекер әйтте.**

Икенсенән, былтыр ҙа, быйыл да Евразия хоккей командалары араһында иң күп очко йыйып, ике ҡитғаның "Иң яҡшы командаһы" титулын һәм кубогын яулаған юлаевсылар плей-офф уйындарының икеһендә лә төшөп ҡалыуын бөтә донъя спорт тарихының тик парадокс хәлдәр һәм ваҡиғалар исемлегенә индерергә генә ҡала.

Урынлы һорау тыуа: Евразияла иң көслө һәм иң яҡшы тип танылған, составында һайлам уҡтай тик чемпиондар, "үҙ эшенең оҫталары" булған команда ни өсөн хәл иткес мәлдәр килеп еткәндә етди уйынға әҙер булмай сыға һуң? Был хәлде осраҡлы, күптәр әйткәнсә, мәҫәлән, "Аҡ барыҫ"ҡа осраҡлы бәхет йылмайыуы тип кенә атап буламы? Әйтәйек, судьяларҙың беҙҙең команда уйынсыларын юҡҡа-барға бәйләнеп, күберәк штраф эскәмйәһе артына ултыртыуын, йә булмаһа, "Аҡ барыҫ" уйынсыларының хәйләкәрлекте эшкә егеп, үҙҙәрен йәлләтеү маҡсатында баштарын тотоп ҡолап китеүҙәрен дә беҙҙең команданың супер уйындан төшөп ҡалыуының төп сәбәбе итеп килтереп буламы?

Булмай, сөнки ошондай уҡ хәл бына инде икенсе йыл ҡабатланды. Мин, әлбиттә, хоккей уйыны буйынса белгес түгелмен, шулай ҙа ике йыл һуҙымында ошо парадоксаль хәлдәрҙе күҙәткәндән һуң ҡайһы бер һығымталар яһаным.

**1-се һығымта:** Аҡса беренсе урынға ҡуйылған урында рух төшөнсәһенә урын ҡалмай. Ошо урында һорау: былтыр ҙа, быйыл да регуляр чемпионатта еңеп сығып, кубокты, еңеү "гонорар"ын алған команда өсөн плей-оффта еңеү мөһимме, кәрәкме? Кем белә, хоккейсылар тиҙерәк еңелеп, берәр диңгеҙ ярына барып ял итеүҙе хуп күрәлер?

**2-се һығымта:** Спортта рух көсөнөң нимәгә һәләтле булыуын Параолимпия уйындарында башҡорт егете Ирек Зарипов күрһәтте. Ул ике аяғы булмаған көйгә дүрт һандары ла теүәл булғандар өлгәшә алмаған уңышҡа иреште: донъя алдында беҙҙең милләтте бер башҡа күтәрҙе, данға күмде. Әбит автоһәләкәткә эләгеп, донъялыҡтан баш тартыр хәлгә барып еткән сағы ла булған Иректең. Уны был хәленән сәмләнә белеүе ҡотҡарған. Ҡотҡарып ҡына ҡалмаған, үҙенә тәбиғәт тарафынан һалынған көстө уятып, бар донъя кимәлендә балҡытыу мөмкинлеге биргән. Ирек Зариповта булған сәмдең бер мыҫҡалы ғына булһа ине беҙҙең юлаевсыларҙа.

**3-сө һығымта:** "Салауат Юлаев"ҡа Салауат рухын ҡайтарып ҡына уның данын һаҡлап ҡалырға, уның мөмкинлектәрен үҫтерергә мөмкиндер. Башҡаса юлды мин бында күрмәйем. Үҙебеҙҙең тренерҙар, үҙебеҙҙең уйынсылар ҡытлығын ныҡ тойҙом мин ошо һуңғы ике йылда.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**"Салауат Юлаев" "Аҡ барыҫ"тан еңелеп, супер уйында ҡатнашыу мөмкинлегенән мәхрүм ҡалғас, Баймаҡ районының бер ауылында йәшәүсе 9 йәшлек Шайморат атлы малай ғәрләнеп, намыҫланып, бер тәүлек буйына илаған, тиҙәр. Әсәһе магазиндан ике туңдырма алып ҡайтып, төрлөсә йыуатып-йәүкәләп, көскә тымыҙғандар үҙен. Йөрәктәрҙе уятырлыҡ, намыҫтарҙы ҡуҙғатырлыҡ көс-ҡеүәткә эйә шул был уйын. Беҙ, иһә, үҙебеҙҙе шулай йыуатайыҡ: "Салауат Юлаев" хоккей командаһы еңелеүе генә Салауат рухының еңелеүен аңлатмай. Бары тик командала Салауат рухының булмауы ғына эште харап итте. Командаға Салауат рухын ҡайтарайыҡ!**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

ИҒТИБАР!

## ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Яҙғы, йәйге мәшәҡәттәр башланмаҫ борон 2010 йылдың икенсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып ҡалығыҙ, тип саҡырабыҙ һеҙҙе. Яңы хаҡтарҙы иғлан итәбеҙ: 50665 индекслы "Киске Өфө" алты айға 318 һум 24 тин, 50673 индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 354 һум 24 тин тора.**

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһын дауам итәбеҙ.**

Әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек. Алты ай буйы гәзит уҡып киләнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрөр яҡындарығыҙ һәм рәхмәт уҡыр.

**Тағы бер тәҡдим бар…**

Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә.

**Бергә булайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!**



Илеш районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Президенты Мортаза Рәхимовтың "Башҡортостанда 2010 йылды Республика йылы тип иғлан итеү тураһында"ғы Указын һәм Республика йылына һәм Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты хаҡындағы декларация иғлан итеүҙең 20 йыллығына ҡарата Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев раҫлаған төп саралар планын тормошҡа ашырыу сиктәрендә киң мәғлүмәт сараларында Республика йылын иң яҡшы яҡтыртыуға республика конкурсы үткәрелә. 2010 йылдың 1 ғинуарынан башлап баҫылған конкурс материалдары идаралыҡта 1 октябргә тиклем ҡабул ителә.

✓БР Хөкүмәтендә үткән кәңәшмәлә ауыр хәлдә ҡалған ғаиләләргә ярҙам итеү мәсьәләһе тикшерелде. Билдәләнеүенсә, 1 апрелгә республикала 15829 ғаилә ауыр хәлдә булараҡ иҫәпкә ҡуйылған, уларҙа 18 йәшкә тиклемге 31437 бала тәрбиәләнә. Ауыр хәлдә ҡалған ғаиләләр исемлегенә аҙ тәьмин ителгәндәр, тулы булмаған, күп балалы, шулай уҡ ата-әсәһе үҙ бурысын үтәмәгән, составында хеҙмәткә яраҡһыҙ һәм ауырыу ағзалары булған, насар психологик мөхитле ғаиләләр инә. Төп ярҙам шунан ғибәрәт: хоҡуҡи-консультатив, психологик, матди ярҙам, сирлеләрҙе дауалау, шулай уҡ торлаҡ-коммуналь түләүҙәр буйынса бурысы булғандарға булышлыҡ күрһәтеү, эшһеҙҙәрҙе эшкә урынлаштырыу. Мәҫәлән, быйыл дүрт айҙа 3012 ғаилә 4,1 млн һумлыҡ ярҙам алған, шул иҫәптән 1,2 млн һумлыҡ торлаҡ-коммуналь түләүҙәр буйынса бурыстары ҡаплатылған.

✓БР Хөкүмәте бойороғо менән 17 апрелдән 2 майға тиклем юридик шәхестәргә һәм шәхси эшҡыуарҙарға беркетелгән һунар биләмәләрендә ҡыр өйрәктәренә һәм ҡаҙҙарына яҙғы һунар асыла. Ә дөйөм ҡулланылыштағы, Өфө муниципаль районы һәм халыҡ йәшәгән урындар эргәһендәге һунарсылыҡ биләмәләрендә һунар итеү тыйыла.

✓26 апрелдән 1 майға тиклем республикала Европа иммунизациялау аҙналығы үтә. Был бөтә Европа илдәрендә лә үткәрелгән киң масштаблы акция Рәсәйҙә 2006 йылдан бирле үткәрелә. Маҡсаты - халыҡтың төрлө йоғошло сирҙәр тураһында мәғлүмәтлелеген үҫтереү һәм иммунизациялауҙың өҫтөнлөктәрен аңлатыу.

*✓ Кемдер көтөп торорға, юл бирергә мәжбүр. Кемдер эшкә һуңлай, сәғәттәр буйына "тығын"дарҙа тора. Ә кемдер торғандарҙың эргәһенән "ялпылдаҡ"тарын ялпылдатып, "ҡысҡырыҡ"тарын ҡысҡыртып үтеп китә.*

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ЮЛ БИРЕРГӘМЕ, ҠАРШЫ ТОРОРҒАМЫ,

## йәки Мәскәү халҡы түрәләр менән нисек көрәшә?



**Йәмәғәт, аңлап тораһығыҙҙыр, түрәләрһеҙ булмай. Элек-электән шулай - халыҡ менән кемдер идара итергә тейеш. Юғиһә... Халыҡ һарыҡ көтөүе менән бер бит. Тырым-тырағай таралашып бөтә лә ҡуя. Береһе уңға, береһе һулға, береһе алға, береһе артҡа. Берҙәмлек юҡ. Ә бергә, бер йүнәлештә һәм бер ритмда хәрәкәт итер өсөн идара итеүсе мотлаҡ. Йүнәлеш биреп, юл күрһәтеп, "һайт-два"ға атлатып барыусы, тимәк. Тәүтормош заманынан уҡ бер төркөмгә йыйылғандар араһынан иң абруйлыһы, иң көслөһө, иң көслө тауышлыһы, иң аҡыллыһы, иң йоморо башлыһы, иң ҙур йоҙроҡлоһо һәм башҡалар кешеләр менән идара итеүҙе үҙ өҫтөнә, йәғни дилбегәне үҙ ҡулдарына алған һәм насармы-яҡшымы, үҙенсә идара итә башлаған. Йүнәлеш биргән, юл күрһәткән, "һайт-два"ға атлатҡан. Йүнәлеше ҡайһы бер ваҡыт дөрөҫ булмаған, юл упҡынға табан илткән, ә төркөмдөң ҡайһы бер ағзалары етәксенең ритмына өлгөрмәй артта ҡалған, аҙашҡан. Тик быныһы бигүк мөһим түгел бит.**

Тәүтормош халҡы түрәләрҙе ихтирам иткән. Улар тирәләй тупланған. Уларға ылыҡҡан. Хатта бер ни тиклем шөрләгән. Ихтирам итмәй булмай ҙа баһа. Улар бөтә нәмәне белә һәм бер нәмәнән дә ҡурҡмай. Ҡарар ҡабул итергә һәләтле. Түрәләр кешеләрҙе күрә белгән, уларҙың ыңғай һәм кире яҡтарын үҙ мәнфәғәттәрендә оҫта файҙаланған. Шуға ла түрәләр тирәләй йоҙроҡтары ҙур, әммә баштары бәләкәй булғандар тупланған. Бөгөнгөсә - милиция, именлек хеҙмәте була инде. Көсһеҙҙәр, әммә башлылар ҙа ошонда уҡ йылышҡан. Уларҙың эшмәкәрлеген рухи яҡтан тәьмин итер өсөн. Бөгөн улар - руханиҙар, идеологтар, депутаттар. Ваҡыт үтеү менән түрәләр үҙ хәленән бер ни тиклем файҙа күрә башлаған. Уларға ҡалъяның иң һимеҙен тотторғандар, урындың иң йомшағын тәҡдим иткәндәр. Ҡыҙ-ҡатындың йәшерәген яҡынлатҡандар. Ул иһә, үҙ сиратында эргә-тирәләгеләрҙе ҡыйырһытмаған. Үҙенән ҡалған һөйәкте, түшәкте, ҡыҙ-ҡырҡынды эргә-тирәһендәгеләргә биргән.

Тағы ла бер ни тиклем ваҡыт үткән (Онотмағыҙ, һүҙ әле һаман тәүтормош кешеләре тураһында бара). Түрәләр тәмле-татлы ашап, йомшаҡта йәш кәнизәктәр менән йоҡлап өйрәнә. Был ғына етмәй башлай. Кемдең башына киләлер инде был уй, әммә бер заман түрәләр үҙ аяҡтары менән йөрөүҙән баш тарта. Кемдер атҡа, йәки ишәккә менә. Ә айырым түрәләр... кеше елкәһенә менеп ултыра. Тиҙерәк йөрөү йәһәтенән түгел, әлбиттә. Түрәлеген тағы ла бер тапҡыр иҫбатлау маҡсатында. Шул уҡ маҡсатта түрәләрҙең алдынан махсус кешеләр йүгереп йөрөй башлай. "Хан килә, батшабыҙ килә! Юл бирегеҙ! Юл!" тип һөрәнләп, түрәләргә юл асыр өсөн...

Ваҡыт үтеп заманалар үҙгәрһә лә, түрәләрҙең ҡылыҡтары бигүк үҙгәреш кисермәй. Бөгөн дә уларҙың килеүе йәки ҡайҙалыр китеп барыуы хаҡында алдан уҡ хәбәр итеп, халыҡҡа еткереп кенә торола. Тик ҡысҡырып түгел, ә ябайыраҡ итеп. Түрәләрҙең машиналарының ҡыйығында урынлаштырылған махсус сигналдар ярҙамында. Быға тиклем "Киске Өфө"лә сыҡҡан мәҡәләләрҙең береһендә мин уларҙы "ялпылдаҡтар" тип атағайным. "Ҡысҡырыҡтар" тип атарға ла мөмкин.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, уларҙың бер зыяны ла юҡ (Түрәләрҙе әйтмәйем, һүҙ ялпылдаҡтар тураһында бара). Киреһенсә, ябай халыҡ өсөн улар бик тә уңайлы. Беренсенән, алдан әҙерләнеп торорға мөмкин. Таш атыр өсөн түгел, әлбиттә. Беҙ үҙебеҙҙең түрәләребеҙҙе яратабыҙ. Тәбрикләп ҡул болғар өсөн, мәҫәлән. Икенсенән, ваҡытында юл бирер өсөн. Түрәләр бит үтә эшлекле халыҡ. Улар һәр ваҡыт ҡайҙалыр ашыға. Улар өсөн светофор ҙа, юл билдәләре лә, юл уртаһындағы ике һыҙат та, ғөмүмән, юл ҡағиҙәләре лә булырға тейеш түгел. Йәғни, икенсерәк әйткәндә, ҡағиҙәләрҙе һәм ҡанундарҙы уйлап табыусылар һәм раҫлаусыларға уларҙы үтәү мотлаҡ түгел бит.

Әйтергә кәрәк, беҙгә төбәктәрҙә йәшәгән ябай кешеләргә "ялпылдаҡ"тар менән йөрөргә мәжбүр булған түрәләребеҙҙең булыуы ҡыуаныс ҡына килтерә. Улар әҙ - бер, ике, өс кенә. Баш ҡалабыҙ урамдарында йәйәүләп йөрөгән Президентыбыҙҙы ла, Премьер-министрыбыҙҙы ла күргән бар. Уларға Өфө буйлап йөрөр өсөн ялпылдаҡтар кәрәкмәй. Ә бына Мәскәүҙә...

Үҙегеҙ беләһегеҙ - Рәсәйҙең баш ҡалаһында дәүләтебеҙҙең барлыҡ власть структуралары урынлашҡан. Президент һәм уның Хакимиәте, Премьер-министр һәм уның Хөкүмәте, Федераль Йыйылыш, уның ике палатаһы - Федерация Советы һәм Дәүләт Думаһы, Конституцион, Юғары, Арбитраж һәм тағы ла әллә ниндәй судтар, Генераль Прокуратура, министрлыҡтар, ведомстволар, Мәскәү мэры, Мәскәү ҡала думаһы, Мәскәү хөкүмәте һәм башҡалар, һәм башҡалар... Беҙ белгәне һәм белмәгәне бихисап. Ҡот осорлоҡ. Ә бит Мәскәү резинанан түгел. Ул бөтәһен дә һыйҙыра алмай. Бөтә ошо түрәләр иртәнсәк эшкә бара, кисен эштән ҡайта. Эш ваҡытында эш менән ҡала буйлап йөрөй. Президент аэропортҡа бара, Премьер аэропорттан ҡайта. Министрҙар бер-береһенә йөрөй. Йәйәүләп түгел, әлбиттә. Метроға ла төшмәй улар. Бөтәһе лә автомобилдәрҙә. Ә баш ҡалабыҙ юлдары бөтәһен дә һыйҙыра алмай. Кемдер көтөп торорға, юл бирергә мәжбүр. Кемдер эшкә һуңлай, сәғәттәр буйына "тығын"дарҙа тора. Ә кемдер торғандарҙың эргәһенән "ялпылдаҡ"тарын ялпылдатып, "ҡысҡырыҡ"тарын ҡысҡыртып үтеп китә. Халыҡ тешен ҡыҫа. Түҙә. Билдәле бер кимәлгә тиклем. Утҡа ултыртылған сәйнүк һымаҡ. Тәүҙә сәйнүктең ҡапҡасы ғына һикергеләй. Шунан инде һыу ҡайнап сығып түгелә башлай. Утты һүндерергә мөмкин...

31 март көндө Мәскәүҙә "ялпылдаҡ" тоҡандырылған "БМВ" автомобиле ҡаршы юлға сыға. Ҡапыл уның алдында ғына икенсе бер машина пәйҙә була. Унан эшҡыуар Андрей Хартли сыға һәм кәрәҙ телефонын сығарып, был машинаны видеоға төшөрә. Уның ишеген асып, пассажирға һүҙ ҡуша. "Исемегеҙҙе әйтегеҙ", ти ул. "Ялпылдаҡ"лы машинала Рәсәй Президентының кәңәшсеһе Владимир Шевченко булып сыға.

Хартли видеокадрҙарҙы интернетта урынлаштыра. Юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоп, ҡаршы юлға сыҡҡан эрелеваҡлы түрәләргә ҡаршы хәрәкәт башлана. Шевченконың һүҙҙәренә ҡарағанда, уға ҡарата махсус рәүештә провокация ойошторолған. Асылда иһә, Андрей Хартли үҙенең ҡаршыһына сыҡҡан кешенең кем икәнен дә белмәгән булған. Хәҙер Мәскәүҙә (һәм Мәскәүҙә генә түгел, ә илдең төрлө ҡалаларында ла) "ялпылдаҡлы" автомашиналарға ҡаршы көрәш башланған.

Һанап ҡарағандар. Мәскәүҙә рәсми рәүештә рөхсәт ителгән "ялпылдаҡ"лы машиналарҙың һаны 1 меңгә етә, имеш. Аңлайһығыҙҙыр, был милиция, "Ашығыс ярҙам" һәм янғын һүндереүселәрҙең автомобилдәренән тыш. Уйлап ҡараһаң, ун миллиондан ашыу кеше йәшәгән Мәскәү өсөн күп тә түгел. Шул уҡ ваҡытта юлдарҙағы машиналарҙы иҫәпкә алһаң, һәр бер "ялпылдаҡ"лы машинаға юл бирергә кәрәклеген иҫтә тотһаң, уларҙың һәр береһе теш шығырлатырға ғына түгел, уларҙың юлына арҡыры сығырға мәжбүр итер.

Ни эшләргә мәскәүҙәргә? Бәлки, юлдарҙа түрәләр машиналары өсөн генә тәғәйенләнгән махсус һыҙаттар булдырырға кәрәктер? Әйҙә, йөрөһөндәр шулар буйлап ҡына. "Ялпылдаҡ"тарҙың һанын кәметергә лә була. Ҡайһы берәүҙәр, махсус сигналдар урынлаштырылған автомобилдәр Президентты һәм Премьер-министрҙы ғына йөрөтөргә тейеш, тигән фекерҙә. Ҡалғандар иһә үҙ ыңғайы менән йөрөһә лә була. Шуныһы бар - беҙҙең илдә түрәләр берәй нәмәне үҙ ҡулына эләктерһә, ысҡындырыр, тимә. Тик революция ярҙамында ғына тартып алып була. Шуға ла Мәскәү халҡы әле оҙаҡ көрәшәсәк ул "ялпылдаҡ"тар менән.

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Роспотребнадзорҙың БР буйынса идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, йыл башынан республикала 236,7 мең йоғошло һәм паразитар сирҙәр осрағы теркәлгән, уларҙың 94,4 проценты грипп һәм ОРВИ-ға тура килә. Үткер эсәк инфекцияһы осраҡтары артҡан. Өфөлә, Өфө һәм Әлшәй районнарында сальмонеллез осраҡтары артыуы күҙәтелгән.

✓Роспотребнадзор хеҙмәткәрҙәре быйыл беренсе кварталда 362 партия сифатһыҙ һәм һаулыҡ өсөн ҡурҡыныс аҙыҡ-түлекте һатыуҙан алған. Был продукцияның ҙур күләме һөт, май продукттарына, минераль һыу, икмәк һәм кондитер ризыҡтарға, ит һәм ит продукттары, ҡошсолоҡ продукттарына тура килә. Байтаҡ алкоголь продукцияһы ла һатыуҙан алынған.

✓Башҡортостан Республикаһының балыҡ запастарын һаҡлау һәм тулыландырыу маҡсатында 2010 йылдың яҙында һыу биологик ресурстары ыуылдырыҡ сәскән осорҙа БР Хөкүмәтенең 5 апрелдәге бойороғо менән сәнәғәт, һәүәҫкәр һәм спорт балыҡсылығын тыйыуҙар билдәләнде. Республиканың барлыҡ һыу ятҡылыҡтарында сәнәғәт балыҡсылығы 15 апрелдән 15 июнгә тиклем тыйыла. Павловка һыу һаҡлағысында тыйыу боҙ ҡуҙалған мәлдән алып 10 июнгә тиклем дауам итәсәк. Бойороҡ шулай уҡ 1 майҙан 10 июнгәсә һәүәҫкәр һәм спорт балыҡсылығы менән шөғөлләнеүҙе тыя.

✓Башҡортостан Рәсәйҙең Ҡораллы көстәренә хәрби хеҙмәткә яҙғы саҡырылыш кампанияһы ваҡытында 8250 егетте оҙатасаҡ, был 2009 йылдың яҙы менән сағыштырғанда 2 мең 650 кешегә аҙыраҡ.

✓Шәйехзада Бабич исемендәге Республика дәүләт йәштәр премияһы буйынса комиссия тәҡдим ителгән эштәрҙе ҡарап, түбәндәге авторҙарҙы конкурста артабан ҡатнашыуға тәҡдим итте: Андрей Ганичев (театр артисы), Искәндәр Ғафаров (музыкант), Руслан Ниғмәтуллин (скульптор), Илдус Фазлетдинов (шағир), Олег Шәйбәков (балет), Рөстәм Ямалетдинов, Павел Мазин (архитекторҙар).

✓Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булыусылар тураһында мәғлүмәт тупланған электрон база булдырыла. Әле базаға 26 млн һәләк булыусы тураһында мәғлүмәт индерелгән дә инде. Күҙалланыуынса, Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булыусылар һаны 26,6 млн-ға барып етә, хәрби юғалтыуҙар 8,8 млн тирәһе. Хәбәрһеҙ юғалғандар 4,5 млн тирәһе тәшкил итә.

✓ *Һуңғы тапҡыр халыҡ иҫәбен алыу сараһында боронғо аҫаба башҡорттарҙың вариҫтары татар булып яҙылды. Ә бит ул ауылдаштарым араһында юғары белемлеләре лә байтаҡ ҡына.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН



## ЭКОЛОГИЯ ЯҠШЫРА

**Былтыр Өфөлә экологик хәл ыңғай яҡҡа үҙгәргән, атмосфераға бысраҡ матдәләр бүленеп сығыуҙың дөйөм күләме 2008 йыл менән сағыштырғанда 32 процентҡа кәмегән, тип белдерҙе Өфө ҡала округы хакимиәтенең экология һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау бүлеге етәксеһе Азат Ҡотләхмәтов. Ҡала хакимиәте башлығы янындағы сираттағы кәңәшмәлә һүҙ ошо турала барҙы.**

Өфө атмосфераһына зыян килтереүҙең иң ҙур өлөшөн автотранспорт алып тора. Ҡалала автотранспорт паркы йыл һайын яҡынса 6 процентҡа арта, һөҙөмтәлә ҡала һауаһы двигателдә янған газдар менән күберәк бысрана. Былтыр Өфөлә автомобилдәр һаны 18 меңгә арткан, әммә уларҙың күбеһе сит илдә етештерелгән һәм "Евро-4" стандартына яраҡлаштырылған. Шунлыҡтан, һауаға зыянлы матдәләр бүлеү күләме кәмегән. Иҡтисади көрсөк шарттарында йөк ташыу, тимәк, ағыулыҡ тотоноу күләме лә һиҙелерлек аҙайған. Автомобилдәр һаны артыу менән бәйле экологик проблеманы хәл итеүҙә йөмәгәт транспорты автопаркын яңыртыу һәм маршрут селтәрен оптималләштереү ҙә ҙур әһәмиәткә эйә. 2009 йылда алты яңы маршрут асылған, өсәүһе үҙгәртелгән, Өфө урамында "Евро-3" стандартына яуап биргән "Нефаз" маркалы 20 автобус йөрөй башлаған. Һауала янған газ күләмен кәметеүгә Жилино-Базилевка автомобиль юлы төҙөү ҙә, иҡтисади көрсөк шарттарында сәнәғәт предприятиеларының аҙыраҡ күләмдә эшләүе лә ярҙам иткән.

Предприятиеларҙа һауа һаҡлаусы саралар күреү атмосфераға сәнәғәт ҡалдыҡтары ташлауҙың кәмеүенә килтерә. Мәҫәлән, Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводында өс резервуарҙы алюмин понтон менән йыһазландырыу тамамланған, һөҙөмтәлә, һауаға углеводород ҡалдығы ташлау йылына 886 тоннаға кәмегән. "УМПО" йәмғиәтендә лә циклондар ҡуйыу яҡшы экологик сара иҫәпләнә. Бынан тыш, күп предприятиелар "Башгидромет" идаралығы менән килешеп, ҡулайлы метеорологик шарттарҙа ҡалдыҡ бүлеп сығара.

АСЫЛЫБЫҘ - БАШҠОРТ!

# КИЛӘСӘКТЕ ТОҠАНДЫРЫР ӨСӨН...



## үткәндәрҙең көлөнән ҡуҙ эҙләйем...

**(Дауамы. Башы 1-се биттә).**

### Юғары белемле булып та...

Был йәһәттән тағы ла бик күп миҫалдар килтерергә булыр ине. Бер мәл дауаханала булғанда күрше койкала ятыусы кеше менән танышып, һөйләшеп киттем. Башта уҡ шуны белдем: унын да, минең дә атайәсәйҙәребеҙ тиҫтерҙәр һәм ғүмер буйы ауылда йәшәүсе колхозсылар. Яңы танышыма атайымдың атаһы Мөхәммәтгәле ҡартатайым хаҡында һөйләнем. Ҡартатайым бик унған, тырыш, аҡыллы һәм киң күңелле кеше ине, илле йылдан ашыу колхозда тимерсе булып эшләне. Атайым менән әсәйем йыш ҡына уның хаҡында ла, башҡа атай-олатайҙарым хаҡында ла һөйләргә яратты, мин уларҙы оло ғорурлыҡ менән тыңлар инем. Улар һөйләгәндәрҙән миңә бигерәк тә ҡартатайымдың атаһы Абдуляппар хаҡындағы хәтирә күңелемә яҡын булды. Беҙҙең фамилия уның исеменән алынған.

Үҙемдең атай-олатайҙарым хаҡында һөйләгәндән һуң яңы танышымдың да үҙенең ата-олаталары хаҡында һөйләүен үтендем. Бәхтиһән, ул атаолаталары хаҡында бер нәмә лә белмәй булып сыҡты. Улай ғына түгел, ул хатта уларҙың исем-шәрифтәрен, йәшәгән дәүерҙәрен, яҙмыштарындағы фәһемле, ҡыҙыҡлы ваҡиғаларҙы ла әйтә алмай. Ә бит ул күптән түгел матбуғат яҙыуы буйынса үҙ заманының иң аҡыллы, иң гуманлы тип иҫәпләнгән ҡырҡ йәшлек совет граждаты ине. Уның кеүек үҙ ырыуын, сығышын, милләтен, улай ғына ла түгел, тамыры буйынса бер милләт вәкиләнән икенсеһенә күсеүен белмәүсе кешеләр һуңғы ваҡыт бик күбәйҙе һәм улар беҙҙең Илеш районының Дөмәй ауылында ла бар.

Һуңғы тапҡыр халыҡ иҫәбен алыу сараһында боронғо аҫаба башҡорттарҙың вариҫтары татар булып яҙылды. Ә бит ул ауылдаштарым араһында юғары белемлеләре лә байтаҡ ҡына. Ни өсөн шулай килеп сыға һуң? Бөтә нескәлектәренә тукталып тормайынса әйтәм, был күренештең иң төп сәбәптәренең береһе күп йылдар, дөрөҫөрәге, күп быуаттар буйы күрше халыҡтың мәҙәниәте йоғонтоһонда йәшәүҙә, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын тәүҙә төрки, аҙаҡтан татар телендә уҡытыуҙа, шулай уҡ был төбәк башҡорттарының башҡорт халҡының героик үткәнен белмәүҙә ята. Элек мәҙрәсәләрҙә башҡорт балалары Ислам динен, уның тарихын өйрәнһә, совет мәктәбендә иһә Боронғо Римдең, Грецияның һәм Рәсәйҙең тарихын өйрәнде. Шулай итеп, үҙ халҡыбыҙҙың тарихы, мәҙәниәте беҙҙең төбәктә бөтөнләй өйрәнелмәне. Быны шуның өсөн дә мин үҙебеҙҙең төбәктең Йылан ырыуы башҡорттары тарихы хаҡында китап яҙырға булдым.

### Үткәнгә пистолет менән атһаң...

Бик ҙур үкенес менән шул хаҡта әйтмәйенсә лә булмай: ҡайһы бер ауылдаштарыма үҙебеҙҙең ырыу һәм ауыл тарихы, йомшаҡ итеп әйткәндә, ҡыҙыҡ булмай сыҡты. Ҡайһы берәүҙәр хатта "татарҙар аҫаба башҡорттар кеүек ер алыр өсөн генә башҡорт булып яҙылған", тип иҫәпләй. Тарихи факттарға таянмайынса ғына ошондай ҡоро раҫлауҙар хәҡиҡәтте боҙоп күрһәтә. Минең менән килешмәүселәр араһында "Нинә үткәнде ҡайтарырға кәрәк?" тип әйтеүселәр ҙә бар. Тәүге ҡарашҡа ғына был фекер дөрөҫ булып тойолған һымаҡ. Әммә үткәндәр хаҡында кинерәк контекста, социаль һәм тарихи планда, кем һуң ул кеше һәм нимә ул йәмғиәт, тип ҡараһаҡ, кеше һәм йәмғиәт үткәндең, бөгөнгөнөң һәм киләсәктең берҙәмлеге булып аңлашыла. Кеше бары тик үҙенең ата-әсәһе, үҙе йәшәгән йәмғиәт тырышлығы менән генә шәхес булып формалаша. Ата-олатайҙарыбыҙ беҙгә ауылдар, ҡалалар, туған телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, әҙәбиәтебеҙҙе, моңобоҙҙо, динебеҙҙе һәм башҡа ҡиммәттәребеҙҙе мираҫ итеп ҡалдырған. Был ҡиммәттәребеҙ яңы быуындар тарафынан ҡабул ителеп, үҫтерелергә, камиллаштырылырға, арттырылырға тейешле. Үҙен цивилизацияла йәшәйем, тип иҫәпләгән кешегә нисек инде үҙенең үткәнен, шәжәрәһен белмәҫкә, өйрәнмәҫкә, ата-олаталары менән ғорурланмаҫка була? Дағстан халыҡ шағиры Рәсүл Ғамзатов шағир Әбүталип Ғафуровтың "...әгәр ҙә һин үткәнгә пистолет менән атһаң, киләсәк һинә пушка менән яуап бирәсәк" ("Йәшел ярымай. Минең Дағстаным" М., 1969) тигән һүҙҙәрен бик дөрөҫ килтерә. Был тәңгәлдә таҗик әҙәбиәте классигы, аҡһаҡалы Саҙритдин Айниҙын: "Киләсәкте тоҡандырыр өсөн үткәндең көлөнән ҡуҙ эҙләйем", тигән һүҙҙәре был хәҡиҡәтте тағы ла тәрәнерәк аса.

Немец философы Гегель бер халыҡта, бер хакимиәт тә үҙенең үткәненән тарихи һабаҡ алмай, тип раҫлай. Шул уҡ ваҡытта тарихи һабаҡ хаҡында икенсе төрлө фекер ҙә бар. Рус ғалимы В.О. Ключевский: "Тарих хатта үҙенән һабаҡ алырға теләмәгәнде лә уҡыта, тарих уларҙы наҙанлығы һәм үҙенән баш тартҡаны өсөн арт һабағын уҡыта",- тип иҫәпләй. Мин үҙемдең китабымды тап ошо күҙлектән яҙҙым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хажғәле Яппаровтың "Беҙҙең шәжәрә" китабында авторҙың үҙе тыуып үҫкән Иҫке Дөмәй ауылының, ғөмүмән, Йылан ырыуы башҡорттарының 400 йылдан ашыу тарихы бәйән ителә. Йылан ырыуы башҡорттарының вариҫтары хәҙерге ваҡытта Илеш, Йәрмәкәй, Туймазы, Шаран, Саҡмағош, Борай, Татарстандың Баулы районында йәшәй. Китапта Йылан ырыуы башҡорттарының ихтилалдарҙа, крәҫтиәндәр һуғышында, 1917 йылдағы ваҡиғаларҙа ҡатнашыуы, совет осорондағы тормошо тарихи документтар менән нигеҙләнеп тасуирлана.**

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ әҙерләне.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев "III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына арналған I Ҡала балалар ҡоролтайы үткәреү тураһында" ҡарар ҡабул итте.

✓Өфөлә 19 муниципаль хеҙмәт төрө электрон төрөнә күсерелә. Берҙәм регистратура эшләй башланы, унда электрон элемтә аша граждандарҙан мөрәжәғәттәр ҡабул ителә. Сиратта - вакансиялар йәрминкәһен һәм балалар баҡсаһында урын алыуға ғаризалар ҡабул итеүҙе электрон төргә күсереү. Берҙәм сайт: www.ufacity.info. Өфө халҡы электрон хеҙмәткә ҙур ҡыҙыҡһыныу күрһәтә. 2009 йылда 947 граждан мэрияның рәсми сайты аша ҡала етәкселәренә 1390 мөрәжәғәт менән сыҡҡан.

✓Баш ҡалала Башҡортостандың социаль картаһын ғәмәлгә индереү башланды. Был карта менән эш башларға йыйыныусы тәүге сауҙа предприятиеһы - "Полушка" селтәре.

✓"Социомаркет" тикшереүҙәр үҙәге мәғлүмәттәре күрһәтеүенсә, Өфөлә йәшәүсе халыҡтың 69 проценты үҙ торлағын булдырырға теләй. Уларҙың 35 проценты ипотека кредитына өмөт тота, яртыһы үҙ аҡсаһын тотонмаҡсы. Һуңғы йылдарҙа үҙ шәхси йортон төҙөргә ниәтләнеүселәр арта бара.

✓Йылы көндәр етеү менән, талпан энцефалиты ҡурҡынысы ла арта. Өфөнөң Дезинфекция станцияһында сыскандарға, шулай уҡ серәкәйҙәргә ҡаршы көрәшкә әҙерләнәләр ҙә инде. Санитар-профилактик эштәр апрель аҙағында башланасаҡ. Өфө тирәһендәге 100 га урман-парк зонаһы махсус препараттар - дезинсектанттар менән эшкәртеләсәк.

✓Өфөнөң Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгендә үткән вакансиялар йәрминкәһе был юлы транспорт һәм элемтә өлкәһенә арналды. 17 предприятие үҙҙәренә эшселәр һайланы. Унда барлығы 600-ләп кеше килде. Уларҙың 93-ө эшкә ҡабул ителде, 153-ө белгес консультацияһы алды. 22 апрелдә үтәсәк йәрминкә һаҡ предприятиелары өсөн хеҙмәткәрҙәр һайлауға арналасаҡ.

✓18 апрелдә Нефтселәр мәҙәниәт һарайында Ф. Ғәскәров исемендәге дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле ҡатнашлығында бейеүсе, БР-ҙың атҡаҙанған артисы Марат Әсәҙуллиндың ижад кисәһе була. Ул III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына арнала. Инеү ирекле.

✓ *Рейд ваҡытында асыҡланыуынса, йышыраҡ бындай фирмаларҙың сорт һәм сәсеү сифатын белдереүсе документтары ла булмай. Етмәһә, бындай тауарҙы һатыу менән ситтән килеүселәр шөғөлләнә.*



ИҠТИСАД ӘЛИФБАҺЫ

**Республикабыҙҙа 2010 йылда эшҡыуарлыҡты үҫтереү программаһы ҡабул ителде. Шуға ярашлы, үҙ эшен асырға теләгәндәргә 300-әр мең һум аҡса биреләсәк. Уны дәүләткә кире ҡайтарыу кәрәкмәйәсәк. Әлегә был эш менән шөғөлләнәсәк ойошма билдәләнмәгән, шуға күрә дәүләттән ярҙам алырға теләүселәргә тейешле документтар туплау өсөн бер аҙ ваҡыт бар әле.**



# ЭШҺЕҘҺЕҢМЕ?

## Үҙ эшенде ойоштор!

### Аҡса кемдәргә биреләсәк?

Был хоҡуҡҡа эйәләр:

-Теркәлеүенә бер йылдан да кәм булмаған фирмалар (интеллектуаль эшмәкәрлек, йәғни уйлап табыуҙар, компьютер программалары яҙыу һ.б. менән шөғөлләнеүселәр).

- Өҫтөнлөклө төр эшмәкәрлек менән шөғөлләнеүселәр.

-25 проценттан да кәм булмаған күләмдә үҙ аҡсаларын һалыусылар. Йәғни дәүләттән 300 мең һум аҡса алыу өсөн үҙ эшенә 75 мең һумдан да кәм булмаған күләмдә аҡса һалыусылар.

-Теркәлгән эшһеҙҙәр, тулы булмаған эш көнө эшләүселәр, түләүһеҙ отпускыла булыусылар, ҡала бюджетын тәьмин итеүсе предприятие хеҙмәткәрҙәре һәм башҡалар өҫтөнлөклө тәртиптә субсидия алыуға хоҡуҡлы. Ләкин аҡсаны алырҙан алда улар мотлаҡ башлангыс эшҡыуарлыҡ курстары үтергә тейеш. Ундай түләүһеҙ курстар халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәктәрендә ойоштоторола.

### Субсидия ниндәй маҡсаттарҙа бирелә?

Хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡы, һалым түләү, кредит бурысын ҡаплауҙан тыш, субсидия бизнесты үҫтереү буйынса башҡа бөтә маҡсаттар өсөн түләнә.

Әйткәндәй, офис өсөн арендаға түләү сығымдары алынған аҡсаның өҫтән бер өлөшөнән дә артығараҡ тәшкил итергә тейеш түгел.

Әгәр эшҡыуарҙың дәүләт ярҙамын эш өсөн түгел, ә үҙ кәрәгенә тотонғаны асыҡланһа, ул алған аҡсаны тулыһынса ҡаҙнаға кире ҡайтарырға тейеш.

### Аҡса ниндәй бизнес өсөн бирелә?

- Ауыл хужалығы, һунар, балыҡсылыҡ һәм урман хужалығы;
- төҙөлөш;
- тире һәм күн менән күмәртәләп сауҙа итеү;
- сувенирҙар, художестволы халыҡ кәсебе изделиелары, ғибәҙәт һәм дини тәғәйенләнештәге әйберҙәр менән ваҡлап сауҙа итеү;
- шәхси ҡулланыуҙағы көнкүреш изделиелары һәм предметтарын ремонтлау һәм прокатҡа биреп тороу;
- программалар менән тәьмин итеүҙе эшләп сығыу һәм ошо йүнәлештә консультация үткәреү;
- мәғлүмәт базаһы һәм ресурстары булдырыу һәм файҙаланыу;
- архитектура өлкәһендәге эшмәкәрлек; инженер-техник проектлау; геолог-разведкалау һәм геофизик эштәр; геодезия һәм картография эшмәкәрлеге; стандартлаштырыу һәм метрология өлкәһендә эшмәкәрлек; гидрометеорология һәм уның менән бәйле өлкәләрҙә эшмәкәрлек;
- клининг компаниялары (йыуыу-йыйыштырыу буйынса хеҙмәттәр);
- мәғариф;
- һаулыҡ һаҡлау һәм социаль хеҙмәттәр күрһәтеү;
- йорт хужалығын алып барыу буйынса хеҙмәттәр;
- ҡунаҡхана һәм рестарандар;
- турист агентлыҡтары;
- фотосалондар;
-кер йыуыу, химик таҙартыу, туҡыма әйберҙәр һәм тире изделиеларын буяу;
- парикмахерскийҙар һәм матурлыҡ салондары;
- ерләүҙе ойоштороу һәм шуға бәйле хеҙмәттәр күрһәтеү;
- физкультура-спорт һәм һауыҡтырыу эшмәкәрлеге.

### Кәрәкле документтар:

- финанс ярҙамы алыу өсөн ғариза;
- ышаныс ҡағыҙы күсермәһе (документтарҙы ышанысլы кеше аша биреүселәр өсөн);
- юридик берәмектәрҙең Берҙәм дәүләт реестры (юридик берәмектәр өсөн) һәм шәхси эшҡыуарҙар Берҙәм дәүләт реестры күсермәләренең төп нөсхәләре;
- акционерҙар реестрынан күсермәнең төп нөсхәһе;
- юридик берәмек йәки шәхси эшҡыуарҙың граждандлығын күрһәтеүсе төп документтың күсермәһе;
- ойошма етәксеһе тарафынан раҫланған устав күсермәһе;
-ҡайтара торған бурыстарының юҡлығы хаҡында һалым инспекцияһынан белешмә;
- килем һәм сығымдар тураһында отчеттар, баланстар һәм бынан алдағы йыл өсөн һалым декларацияһы күсермәләре;
- Дәүләт комитеты приказы менән раҫланған формала бизнес-план;
- сығымдар сметаһы (йәғни аҡсаны ниндәй маҡсаттарҙа тотонасаҡһығыҙ);
- башланған эшегеҙгә үҙ аҡсағыҙҙы һалыуҙы раҫлаған документтар;
- лицензиялар күсермәләре;
-эшһеҙлеккә йәки эштән бушатылыу ихтималлығын раҫлаусы документтар.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**әҙерләнә.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЙЫЛҒАЛАР ҘА ТАҘАРА

**2009 йылда ҡала янындағы һыу объекттарының торошо ла күпкә яҡшырған.**

Бысраҡ һыу ағып төшөү күләме 22 процентҡа кәмегән. Ҡаланың күп предприятиелары ресурс һаҡлау технологиялары ҡулланыу һөҙөмтәһендә, 2008 йыл менән сағыштырғанда, һыу ҡулланыуҙың дөйөм күләме 8 процентҡа кәмегән. "Өфө һыу каналы" предприятиеһы тарафынан һыу объекттарының экологик хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса эштәр башҡарылған, унда бөтәһе 300 миллион һум тотонолған. 2009 йылдың ғинуарынан Ағиҙел йылғаһына таҙартылмаған һыу ағыҙыу туҡтатылған. Ҡар һыуҙарының насар тәьҫирен кәметеү маҡсатында Өфөнөң ҡар иретеү пунктында 7,5 мең кубометр бысраҡ ҡар эшкәртелгән. Алдағы йылдарҙа "2010-2012 йылдарға Өфө ҡалаһының дренаж-ямғыр канализацияһы схемаһы"н тормошҡа ашырыу сиктәрендә ямғыр һыуҙары менән бысраҡ һыу йылғаға ағып төшмәһен өсөн 40 таҙартыу ҡоролмаһы төҙөү ҡаралған. Өфө экологияһына урамдарҙы йәшелләндереү, сүп-сар әйләнәшен үҙгәртеү ҙә яҡшы йоғонто яһай. Бөгөн Өфөлә ике экологик программа тормошҡа ашырыла, уларҙың сиктәрендә 2003 йылдан алып 4,2 миллиард һум аҡса тотонолған.

# ОРЛОҠТОҢ СИФАТЛЫҺЫН АЛ

**Йәшелсә һәм сәскә орлоҡтары баҙары йыл һайын тулыланып тора. Шуға ла орлоҡ етештереүсе һәм һатыусы төрлө фирмаларҙың ҡайһыһының тауарын алырға икән, тип аптырауға ҡалыусылар ҙа юҡ түгелдер. Ошоларҙы иҫәпкә алып, БР-ҙың Россельхознадзор идаралығы инспекторҙары рейд үткәрҙе һәм иң сифатлы тауарҙы билдәләргә тырышты.**

Бөгөн "НК" корпорацияһы, "Поиск" агрофирмаһы, "Рәсәй орлоҡтары", "Аэлита", "Седек", "Гавриш", "Семко", "Лилиә" холдингылары баҙарҙың 50 процентын алып тора. Ҡалған компаниялар ҡайҙандыр орлоҡ һатып алыу һәм уны ҡаптарға төрөп һатыу менән генә шөғөлләнә. Рейд ваҡытында асыҡланыуынса, йышыраҡ бындай фирмаларҙың сорт һәм сәсеү сифатын белдереүсе документтары ла булмай. Етмәһә, бындай тауарҙы һатыу менән ситтән килеүселәр, нигеҙҙә, Беларусь Республикаһы граждандары шөғөлләнә. 2009 йылда ғына улар тарафынан республикаға 300 килограмм орлоҡ индерелә. Инспекторҙар яҡшы уңыш алырға теләүселәргә һатыусылардан сертификат талап итергә ҡуша. Ҡаптарға төрөлгән орлоҡ һатып алғанда шуға иғтибар итергә кәрәк: ҡап тышына орлоҡ һатыусы фирманың исеме, адресы һәм телефоны, культураның атамаһы, уның сорты, сорт һәм сәсеү сифатының стандарты (ТУ), партия номеры, орлоҡтоң массаһы, яраҡлылыҡ ваҡыты күрһәтелергә тейеш. Әгәр ҙә орлоҡ бер ҡат ҡапҡа төрөлһә, уның яраҡлылыҡ ваҡыты 1 йыл, ике ҡатлы булһа - 2 йыл. Ҡаптың тышында төҙәтеүҙәр булмаһын. Орлоҡтарҙы махсуслашҡан магазиндарҙан һатып алыу ышанысլыраҡ.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

# ЛИМОН



Лимон халыҡ медицинаһында киң ҡулланылған емештәрҙең береһе. Уның составының төп өлөшөн һыу һәм лимон кислотаһы алып тора. Бынан тыш, лимон организм өсөн кәрәкле витаминдарға, бигерәк тә С витаминына бай. С витамины матдәләр алмашыныуына йоғонто яһай һәм туҡымаларҙы туклындырыуҙа ҡатнаша. Бынан тыш, лимонда А, В1, В2, D һәм цитрус емештәрендә генә була торған цитрин (Р витамины) бар.

**Төндә йоҡлай алмаһағыҙ:** 1) 1 стакан лимон һутына 2 ҡалаҡ ҡарабойҙай балын ҡушып болғатҡандан һуң, 2 ҡалаҡ ваҡланған грек сәтләүеге өҫтәргә. Ятыр алдынан 1 ҡалаҡ ашарға; 2) 1 лимондың тышын ҡырғыстан үткәреп, 2 ҡалаҡ бесәй үләне (валериан) тамыры, 3 ҡалаҡ аҡ сәскә өҫтәп, ҡайнар һыу ҡойорға. 1 сәғәт төнәткәс, һөҙөп алырға. Иртән һәм кис ашағандан һуң ярты стакан эсергә.

**Атеросклероз** булғанда лимон һуты ҡушып яһалған төнәтмәләр бик файҙалы. Лимон һутындағы файҙалы матдәләр ҡан тамырҙарын таҙарта, холестерин тығындарын эретә. Бының өсөн 50 г салат менән 2 ҡыярҙы ваҡ итеп турарға. Лимондың һутын һығып алырға ла, йомшаҡ өлөшөн турарға. Килеп сыҡҡан турамаға лимон һуты өҫтәргә.

Ревматизм менән яфаланһағыҙ ҙа лимон менән дауаланығыҙ. Лимон кислотаһы һәм витаминдар ялҡынһыныуҙы булдырмай, организмды нығыта. Лимон ҡабығын спиртҡа һалып төнәтеп, тәнде ыуһаң, ауыртыу баҫыла.

**Һалҡын теймәһен өсөн:** лимонды 1 минутҡа ҡайнар һыуға тығып алығыҙ һәм тышы менән ит турағыстан үткәрегеҙ. Уға 100 г аҡ май, 1-2 ҡалаҡ бал өҫтәгеҙ. Ғәҙәти май кеүек һаҡлайҙар һәм ҡулланалар. Лимонды өлөштәргә бүлеп, банкаға һалығыҙ һәм өҫтөнә шәкәр һибегеҙ. Һыуытҡыста 12 сәғәт тотҡандан һуң, балаларға көнөнә 1 балғалаҡ бирергә.

Иммун системаһын нығытыу өсөн: 3 кг сөгөлдөр, 2 кг кишер, 2 кг гранат, 2 кг лимондың һутын һығып (лимондың төштәрен алырға, ә гранатты төштәре, тышы менән бергә үткәрергә), банкаға ҡойорға ла, 2 кг бал өҫтәргә. Эсемлекте көнөнә ике тапҡыр: 100 г тирәһе иртән һәм кис 1 ай дауамында эсергә.




## ҠЫҘ БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Өй ҡағиҙәләре

● Башҡа еҫ тейгәндә йәки һауа боҙолоп, тын бөткәндә, ағыу менән ағыуланғанда, йәрәхәттән артыҡ ҡан аҡҡанда, танау ҡанағанда, ағзалар өшөгәндә, һуш киткәндә иң беренсе зарарһыҙ ярҙам нимә булыуын күңелегеҙгә алығыҙ һәм белегеҙ.

● Кейемдәрегеҙҙәге йыртыҡтарҙы, һүтектәрҙе күргәс тә үҙегеҙ ямағыҙ, үҙегеҙ тегегеҙ. Керҙәрегеҙҙе йыуығыҙ. Керҙе нисек киптерергә, нисек үтекләргә, һабынды ни рәүештә һәм ни ҡәҙәр ҡулланырға кәрәк икәнде энәһенән ебенә ҡәҙәр ентекләп белегеҙ.

● Кейемдәрегеҙҙе үҙегеҙ бесеп, үҙегеҙ тегегеҙ. Иҙәндәрҙе һеперегеҙ һәм йыуығыҙ, баҡыр һәм еҙ һауыттарҙы һәм самауырҙы ағартығыҙ. Һәр сәй эскәндән һуң сынаяҡтарҙы йыуып ҡуйығыҙ. Шкаф, өҫтәл һәм башҡа урындарҙағы туҙандарҙы һөртөгөҙ. Үрмәксе ояларын бөтөрөгөҙ. Өйҙәң һауаһын саф торға өйрәнегеҙ.

● Өй эсендәге әйберҙәрҙең иң ҙурынан иң бәләкәй һәм иң ваҡ-төйәгенә ҡәҙәре лә донъяла йәшәүҙең нигеҙелер. Уларҙы урынлы ҡулланыу өйҙә тәҙәтер. Әгәр улар урынһыҙ ҡулланылһа, өй харап булыр. Шуның өсөн өй эсендәге әйберҙәрҙе, хатта иң бәләкәйенә ҡәҙәр белеп, ни рәүештә ҡулланырға кәрәк икәнде белегеҙ.

● Бөйөк ғалимдар: "Әҙәм балалары араһында осраған яҡшы һәм яман эштәрҙең барыһының төп сәбәбе ҡатындыр, байлыҡтан фәҡирлеккә төшөүҙең сәбәбен дә өйҙәге ҡатындарҙан һорағыҙ!" - тигәндәр. Шуның өсөн киләсәк тулыһынса һеҙҙең ҡулығыҙҙа, һәм ни ҡәҙәр оло булһа ла, өй эштәре - һеҙгә аманат ителәсәктер. Шуға күрә шул көндәрҙә гүзәл идара һәм тәрбиә итеү өсөн был сәғәттән әҙерләнегеҙ, юлбашсы булып алып барған каруанды сүлдә аҙаштырмаслыҡ һәм кәмәне ҡомға ултыртмаслыҡ ғәмәлдәрҙе бөгөндән өйрәнегеҙ.

### Мәктәп ҡағиҙәләре

● Иртә йоҡонан торғас та, тәһәрәт алығыҙ. Биттәр, ҡулдар һәм аяҡтарығыҙҙы яҡшылап һөртөгөҙ. Сәстәрегеҙҙе тарағыҙ. Көндәге кейемегеҙҙе кейегеҙ. Сәй эскәндән һуң дәрестәрегеҙҙе ҡабатлағыҙ.

● Мәктәпкә мөмкин тиклем иртә барығыҙ. Ваҡыт еткәс, башҡаларҙың әйтеүҙәрен көтмәйенсә, үҙегеҙ белеп әҙерләнегеҙ һәм кеше әйтеүенән алда сығып китегеҙ.

● Мәктәпкә барғас, әҙәпле генә урынығыҙға ултырығыҙ. Дәрес ваҡытында һөйләшмәгеҙ. Күркәм холоҡло булыуҙы оло бәхет тип иҫәпләгеҙ. Йәшлек бер генә мәртәбә килгәнен һәм был ваҡыт үтеп киткәндән һуң кире ҡайтмаясағын, йәш ваҡытта тәрбиә алмаған кеше һуңынан һис тәрбиә алмаясағын,белем һәм тәрбиә юлында һис бер нәмә ҡыҙғанырға ярамағанын онотмағыҙ.

**(Дауамы бар).**

*АСЫЛЫБЫҘ - БАШҠОРТ!*

**Илеш районы ауылдары аҫаба башҡорт ырыуҙары ерҙәрендә барлыҡҡа килеп, ошо ырыу исемдәре менән аталып йөрөтөлгән олоҫтарға ҡараған. Йылан олоҫона - Йонно, Лаяшты, Буралы, Йәркәй, Үрге- һәм Түбәнге Сереккүл, Этей, Теләпән, Ишҡар, Сәйетҡол, Тәжәй, Ҡыр Йылан олоҫона - Рсай, Янтуған, Дөмәй, Гәрәй олоҫона - Хажы, Теләкәй, Иҫке һәм Яңы Бейектау, Елдәк олоҫона - Үрге Манчар, Яңы Аташ, Сүлте, Иләкшиҙе, Төйләгән, Йәнәй олоҫона (байлар һәм ҡыпсаҡ башҡорттары менән ҡатнаш) - Турасы, Ҡыпсаҡ, Йәйләү,Бүләр олоҫона - Исәмәт, Аҡкүҙ, Байлар олоҫона - Ҡаҙыр, Һеңрән, Ҡырғыҙ олоҫона Күктау, Яңы Күктау, Шаммәт, Ҡарабаш, Иҫәнбай, Айыу, Яңы Айыу, Татыш, Илеш, Иҫке Ҡырғыҙ, Бейектау, Тыпый, Иштирәк, Үрмәт, Бишҡурай, Кесе Бишҡурай ауылдары инган.**

# АҪАБА БАШҠОРТ ВАРИҪТАРЫ ТӨЙӘГЕ,

## йәки Илеш районы ауылдары тарихынан

1783 йылдан бирле ошо ауылдарҙың күпселеге Ырымбур губернаһының Бөрө өйәҙенә, ҡалғандары - Бәләбәй өйәҙенә ҡараған. 1866 йылда Ырымбур губернаһы ике өләшкә бүленгәс, улар административ яҡтан Өфө губернаһы ҡарамағында була. 1798-1865 йылдарҙа был ауылдар 10-сы (1847 йылдан 11-се) һәм 12-се (13-сө) башҡорт кантондары составына индерелә. Хәҙерге Илеш башҡорттарының ата-бабалары башҡорт ихтилалдарында ла, Рәсәй батшалығы алып барған һуғыштарҙа һәм хәрби походтарҙа әүҙем ҡатнаша.

1795 йылдан башлап уҙғарыла башлаған ревизия документтарында һәм совет дәүерендәге халыҡ иҫәбен алыу материалдарында хәҙерге Илеш районының түбәндә һанап үтелгән 32 ауылы (улар араһында яңылары ла бар) фәҡәт башҡорт ауылдары тип күрһәтелгән: Абдулла, Ашман, Бишҡурай, Бүләк, Дөмәй, Иғмәт, Илеш, Иҫәнбай, Иҫке Күктау, Ирмәш, Ишҡар, Йонно, Кесе Тәжәй, Лена, Оло Йылан, Рсай, Сәйетҡол, Татыш, Теләкәй, Түбәнге Йәркәй, Түбәнге Сереккүл, Тәжәй, Үрге Сереккүл, Үрге Юлдаш, Үрмәт, Үрнәк, Хажы, Ябалаҡ, Янтуған, Яңы Айыу, Яңы Күктау, Яңы Тормош.

Билдәле сәбәптәр арҡаһында элекке башҡорт-типтәр ауылдары башҡорт-татар ауылдары, тип атала башлай. Мәҫәлән, район үҙәге Үрге Йәркәй элегерәк уҙғарылған халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса һәр саҡта ла башҡорт ауылы булараҡ теркәлгән була. Шулай итеп, этник яҡтан башҡорт сығышлы булған Иләкшиҙе, Төйләгән, Үрге Манчар, Ҡуян, Турасы, Буралы, Этей, Тыпый, Теләпән, Ҡаҙыр, Һеңрән, Иштирәк, Ҡарабаш, Ҡырғыҙ, Иҫке Айыу, Аташ, Шаммәт, Лаяшты, Исәмәт, Үрге Йәркәй ауылдары башҡорт-татар ауылдары, тип һанала башлай.

Мәҫәлән, **Үрге Манчарҙа** 1795 йылда 172 башҡорт һәм 34 типтәр теркәлһә, 1917 йылда 381 йорттан торған был ауылда 1741 аҫаба башҡорт, 104 типтәр йәшәгән. 1920, 1959, 1979 йылғы халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса был ауыл башҡорт ауылдарынан һаналһа, 1989 йылда башҡорт-татар ауылы тип теркәлә. Шулай уҡ 1917, 1920, 1959, 1979 йылдарҙа башҡорт ауылдары иҫәбенә инган Ҡужбахтының 1989 йылда татар ауылына әйләнеү сәбәптәрен бер нисек тә аңлатып булмай.

Тарихи документтар аша ысынбарлыҡта ҡайһы ауылда ниндәй халыҡ йәшәгәнен бик аныҡ белергә була. Тап шуның өсөн һәр кемгә үҙ ата-бабаларының этник сығышын асыҡлау фарыҙ. Ошо маҡсатта Илеш районы территорияһындағы ҡайһы бер ауылдар тарихына ҡағылған документтарҙағы мәғлүмәттәрҙе барлап үҙайыҡ.

Йылан башҡорттарының **Йонно ауылында** 1858 йылда 70 йортта 512 башҡорт булып, шул уҡ йылда припущенник сифатында 46 типтәр индерелгән. 1842 йылда бында 53 йәшлек Ҡасар улы Аҡай Бикташев йорт старшинаһы вазифаһын биләгән, уның Әхмәтйән, Мөхәмәтҡим исемле улдары булған. Уның ярҙамсыһы, 52 йәшлек Смаҡ улы Йонос Шаммасов (Үрге Манчар ауылынан) 1830-1831 йылдарҙа 6-сы башҡорт полкы составында әсиргә төшкән поляк ихтилалсыларын Польшанан Белоруссияға һаҡ аҫтында алып барыусы конвойҙа булған.

**Лаяшты ауылы** Йылан башҡорттарының Лаяшты түбәһенә ҡараған боронғо ауылы, ул байтаҡ ҡына документтарҙа теркәлеп ҡалған. Әйткәндәй, ошондай уҡ атамалы йылға буйында урынлашҡан ауыл исеменән Лаяшлы формаһында булмауы үҙе үк урындағы боронғо башҡорт һөйләшенә ишаралап тора. 1717 йылда ошо ауыл башҡорто Мостафа Табанаев бер ауылдашына үҙенең аҫаба еренә ҡайтып китәсәге хаҡында белдергән яҙыу ҡалдырған (күрәһең, ул бында килмешәк хәлендә көн иткән). Әммә ул 1740 йылға тиклем ошо ауылдан китмәгән, сөнки 1735-1740 йылдарҙағы ихтилалды аяуһыҙ баҫтырған генерал-лейтенант Соймонов бойороғо буйынса йорт-милке иҫәпләнеп, тартып алынғандан һуң Мостафа Табанаев ғаиләһе менән язаға тарттырылыу өсөн Минзәлә ҡәлғәһенә ебәрелергә тейеш була, ләкин, документта яҙылғанса, "в оной деревне Лаишлы повешен". 1858 йылда Лайыштыла 60 йортта 436 аҫаба башҡорт һәм 9 йортта 80 башҡорт, типтәр һәм мишәр припущенниктары теркәлгән. 1870 йылда ауылда мәсет, почта станцияһы һәм ике һыу тирмәне булған.

6-сы йорттоң **Буралы ауылы** Йылан ырыуы башҡорттарының Уразай түбәһенә ҡараған. Йыландар 1718 йылда типтәрҙәрҙе индерә башлай. Әммә 1697 йылғы башҡа бер документта (ул "оберегательная грамота" тип атала) Йылан олоҫо башҡорттары Уразмәт Туктаровҡа һәм уның энеһе Һарайға "велено платить окладной ясак вместо тое же волости башкирца Токмалка Карамышева куницу да пол-батмана меду, буде он, Токмалка, пропал безвестно... и тот ясак лежит в пусте", тип яҙылған. Буралы типтәрҙәре ошо документы Йылан башҡорттарының ерҙәре менән файҙаланыу хоҡуғы бирә, тип иҫәпләгән. Тәүге типтәрҙәр үҙҙәре лә башҡорт сығышлы була. 1858 йылда бында 11 йортта 74 аҫаба башҡорт һәм 19 йортта 108 типтәр һәм мишәр теркәлгән.

Байтаҡ ҡына тарихи документтарҙа Йылан башҡорто Йәркәйҙең исемен осратып була. Йылан олоҫоноң Ялан (Йылан) ауылы һәм шул ауылдың Йәнсура Нуғаев исемле кешеһе 1664 йылға ҡараған документта күрһәтелгән. 1715, 1722, 1728 йылдарҙа тәҙәлгән документтарҙа Йәнсураның улы Йәркәй ҙә иҫкә алына. Күрәһең, был нәҫел күренекле башҡорт аҫабаларынан булып, тирә-яҡтағы башҡа ырыуҙар араһында ла билдәле булған. Йәркәй Йәнсурин 1728 йылда Өфө өйәҙенең Ҡаҙан, Уса, Себер һәм Нуғай даруғалары башҡорттарынан төҙөлгән 32 кешелек делегацияның еткселе сифатында Мәскәүгә император Петр II коронациялау тантанаһына килә. Башҡорттар ошо мөмкинлектән файҙаланып, император Петр II исеменә яҙма һорау менән мөрәжәғәт итә. "Об учинении розыска по поводу обид и притеснений, перенесенных ими от воевод и целовальников (сборщиков податей), и об охранении их вотчинных прав на земли" тип яҙылған документҡа башҡалар менән бергә Ҡаҙан даруғаһы Ялан ауылы башҡорто Йәркәйҙең дә тамғаһы ҡуйылған. Башҡорттар, ысынлап та, батша ғали йәнәптәренең ҡабул итеүенә өлгәшә. Документаль сығанаҡтарҙың береһендә "Яркей, башкирец, с товарищи был у Петра II, который приказал ежегодно ко двору своему ездить", тип яҙылған. Ошо ҡабул итеү һөҙөмтәһендә императорҙың махсус указы ла сығарыла. 1728 йылдың июль аҙағында сығарылған "Об отделении Уфимской провинции от Казанской губернии, о состоянии оной в особенном ведомстве Сената" тиған батша указында "Указом мы, по челобитью присланных из Уфимской провинции выборных челобитчиков башкирцов Яркея Янчурина с товарищи в Уфимской провинции быть воеводою бригадиру Петру Бутурлину и быть той провинции в особливом ведомстве нашего Сената, и о всяких делах писать ему и требовать нашего указа от Сената; а Казанскому губернатору той провинции не ведать ..." тигән күрһәтмәләр иғтибарға лайыҡ. Был тарихи сығанаҡ башҡорттарҙың Ҡаҙан губернаһы чиновниктарынан күп яҙалар күреүе айҡанлы көсөргәнешлекте кәметеү маҡсатында император тарафынан Өфө провинцияһын туранантура Сенат ҡарамағына күсереү кеүек административ сара күрелеүен аңлата.

Йәркәй Йәнсурин үҙ замандаштары өсөн ҡаршылыҡлы шәхес булған. Мәскәүҙә императорҙың ҡабул итеүен көткәндә ул сит ил эштәре министрлығында талмас булып хеҙмәт итеүсе Ҡотломөхәмәт Тевкелев (башҡорт халҡының буласаҡ ҡан эскес йәлләде) менән һөйләшә, үҙенең башҡорт ерҙәрендә ҡасып көн иткән кешеләрҙе батша властарына тотоп биреүгә ризалығын белдерә. Тарихи документта яҙылғанса, ул биргән мәғлүмәт иҫәпкә алына: "из татар и протчих народов ... такие беглые люди в Казанской дороге в тех волостях, где он, Иркей живет, имеетца человек с 1000 ...". Шуға күрә батша указында "велено им, башкирцам, беглых казанских татар, которые у них жили, возвратить в прежние их жилища, и они оные и возвратили, а ныне живут на их земле беглые татара Яиклыч с товарищи. И чтоб тех татар от них выслать в прежние их жилища, и о том бы послать указ к воеводе", тиған юлдар бар. Ҡайһы бер риүәйәттәргә ҡарағанда, батша чиновниктары менән яҡындан аралашып, уртаҡ тел таба алыуына ҡарамаҫтан, Йәркәйҙе үлтерергә теләүсе башҡорттар ҙа була.

1858 йылда **Йәркәйҙә** 79 йортта 677 аҫаба башҡорт, 22 йортта 176 башҡорт, типтәр һәм мишәр припущенниктары йәшәгән. Ауылда ике мәсет булған, Баҙы һәм

**✓ Был документта урындағы башҡорттарҙың Ҡаҙан өйәҙенән ҡасып килгән татарҙарҙы хөкүмәт ебәргән хәрби эҙләү отрядтарына тотоп бирмәү хаҡында килешеүҙәре бәйән ителә.**

Ишә йылғаларында 6 тирмән ҡоролған.

**Илеш ауылы** Ҡырғыҙ олоҫоноң Айыу түбәһенә ҡарай. 1866 йылда Илеш олоҫо барлыҡҡа килеп, уның үҙәге Яңы Айыу ауылында була. Илеш ауылына XVII быуат урталарында нигеҙ һалынған. Ҡырғыҙ олоҫона ҡараған Шаммәт ауылы бар, ул 1718 йылғы документта иҫкә алынған

Шаммәт Илишев исеме менән аталған. Әйткәндәй, хәҙерге Илеш исеменең асылда Илиш булып, Ил ише мәғәнәһе менән бәйле булыуы хаҡында яҙыусылар ҙа бар. Илештә аҫаба башҡорттарҙан башҡа 1693 йылдан бирле припущенник хәлендә индерелгән мари крәстиәндәре йәшәй, һуңға табан татар типтәрҙәре лә килеп урынлаша.

VII ревизия (1816 йыл) материалдарында бында 7 ауылдан торған 10-сы йорт старшинаһы, 45 йәшлек Утна Абдулхәйеров тураһында мәғлүмәттәр бар. Уның 2 ҡатыны, 3 ҡыҙы, 4 улы булып, вафат булған ағаһының ҡыҙы ла тәрбиәләнә. 1816 йылда Илештә 36 йортта 112 башҡорт ир-аты һәм 122 ҡатын-ҡыҙ йәшәй. Ғаилә ҡоролошо төрлөсә була: 25 йортта бәләкәй ғаилә (ир, ҡатын һәм бәлиғ булмаған балалар), 9 йортта атай ғаиләһе (ата йортонда өйләнгән улдары үҙ ғаиләләре менән бергә көн итә), 2 йортта ағайэне (өйләнгән ир туғандар уртаҡ хужалыҡ алып бара) ғаиләһе теркәлгән. Илештә 3 полигам (күп ҡатынлы) ғаилә иҫәпкә алынған: бер кешенең өс ҡатыны, ике ирҙең икешәр ҡатыны була.

Сөн йылғаһында Илеш ауылы башҡорттары 12 һыу тирмәне ҡора. 1870 йылда ауылдың ике мәсете булып, икеһендә лә мосолман мәктәптәре эшләй. 1896 йылда ауыл сходында ҡабул ителгән ҡарар теркәлгән документка 77 кешенең 22-һе үҙ имзаһын төрки яҙмаһында ҡуйһа, ҡалған 55-е тамға ғына ҡуйған.

Айыу түбәһенә ҡараған **Шаммәт ауылы** Сөн йылғаһы буйына урынлашҡан. "Башҡорт АССР-ы тарихы буйынса материалдар" китабында Ҡырғыҙ олоҫо башҡорто Шаммәт иҫкә алынған документ бар. Был документта урындағы башҡорттарҙың Ҡаҙан өйәҙенән ҡасып килгән татарҙарҙы хөкүмәт ебәргән хәрби эҙләү отрядтарына тотоп бирмәү хаҡында килешеүҙәре бәйән ителә. 1704-1711 йылғы ихтилалда ҡатнашыусы "ҡырғыҙ Шаммәт" тураһында "согласился с ними заодно быть", тип яҙылған. Уның исем-шәрифе икенсе бер сығанаҡта ла сағылыш таҡкан. 1712 йылда Йәлдәк олоҫоноң бер башҡорто поручик М. Г. ?уковтан аҡса алып торған. Был килешеү поручителдәре сифатында Ҡырғыҙ олоҫо башҡорттары Шаммәт Илишев һәм Иҫәнбай Йәнруҫов теркәлгән. Уларҙың икеһе лә үҙ исемдәре менән аталған ауылдарға нигеҙ һалған. Шаммәттең Илешев фамилиялы булыуы уның атаһы ауылынан яңы урынға күсеп сығыуы хаҡында һөйләй.

Ошо ауыл кешеләре Абдулхәким һәм Мөхәмәтйән Вәлитовтар, Мөхәмәтсадиҡ Мөхәмәтйәров, Ғәзетдин һәм Арҙашир Сәйфелмөләковтар, Хөсөрүәшир Арҙаширов һәм башҡалар 1851 йылдың 11 июлендәге ғаризала Ағиҙелдең уң яғында, үҙ ауылдарынан 25 саҡырым алыҫлыҡта Көлтә йылғаһы буйындағы аҫаба ерҙәренә игенселек менән шөғөлләнеү өсөн күсеп сығырға рөхсәт һорап яҙған. Иштүбә тип йөрөтөлгән ошо төбәккә һунынан Татыш ауылынан 30 ғаилә күсеп килгән. Илештән 54 ир-аттың шул яңы урынға күсеп ултырырға теләк белдереүе лә билдәле. Шаммәт ауылында 1795 йылда барлығы 70 башҡорт теркәлһә, 1858 йылда 27 йортта 269 кеше йәшәй. 1870 йылда бында мәктәпле мәсет, 2 һыу тирмәне булған.

1790 йылда **Үрге Серекҡүл ауылы** башҡорттары үҙ ерҙәренә мишәрҙәрҙе индерә. Уларҙы ауылға индереү өсөн бер татар кешеһе менән төҙөлгән килешеү бында була. Ул килешеүҙә бына ниҙәр теркәлгән: "Лета 1799 (башҡа документтарҙа - 1790 йыл. - Ред. иҫк.) февраля в 26 день Уфимского уезду Казанской дороги Иланской волости ясачной башкирец Тойгильда Ейшаев дал есми в Бирску сию на себя запись, той же Казанской дороги деревни Черекуль татарину, родственнику своему Уразметю Мамышеву в том, что припустил я, Тойгильда его, Уразмета, в вотчину свою вместо умершего брата своего родного Топака Ейшаева и ему, Уразметю, в той нашей вотчине старыми моего десятью братьями владеть и вновь борти делать, рыбу и птицу ловить и хмель щипать и на санях с нами и собозом ездить и где угодно двором поселиться и пашню пахать и сено косить, и владеть тою вотчиною ему, Уразметю и детям и внучатам вечно, а стой вотчины великого государя в казну ясак платить ему, Уразметю, со мною, Тойгильдой, и с другими моими товарыщами, и подводы гонять в равенстве, а с кого нам, Тойгильде с товарыщами, подле жительство имать в помочь в ясак великого государя с других посторонних и за рыбныя ловли оброк и ему, Уразметю, с нами по тому же имать в равенстве и мне, Тойгильде, и детям моим его, Уразмета, и детей и внучат его с той вотчины ныне и впредь не сылать, и ни в чем не отказывать, и обиды никакой не чинить и от своей братии вотчинников башкирцев во всем очищать. А буде я, Тойгильды, и против вышеписанного в чем не устою по сей записи взять ему и детям моих за неустойку двадцать рублев денег. А сия запись и впредь в запись. К сей записи Тойгильда Ейшаев запись на себя дал и тамгу приложил такову V".

1795 йылда Үрге Серекҡүлдә 89 башҡорт, 44 мишәр теркәлһә, 1858 йылда 29 йортта 304 башҡорт, 20 йортта 189 мишәр йәшәгәне билдәле.

Түбәнге Серекҡүл ауылында аҫаба башҡорттар ғына йәшәй. Йәркәй, Йонно, һәм ике Серекҡүл ауылы аҫабаларының 1830 йылда Туҡтамыш Һөйөндөк тигән кешегә Рәс күлен балыҡ тотоу өсөн 5 йылға ҡуртымға биреүе тураһында ла документ һаҡланып ҡалған. Түбәнге Серекҡүлдә 1795 йылда 11 йортта - 120, 1858 йылда 31 йортта - 253, 1920 йылда 144 йортта 750 кеше теркәлгән. Кантон идаралығы осоронда башҡорттар Яйыҡ йылғаһы буйында сик хеҙмәтенә ебәрелгән командалар составында 6-шар ай хәрби булыс үтәгән. 20 йөштән 50 йәшкә тиклемге ир-ат бындай хеҙмәткә 6-8 тапҡыр ебәрелгән. Серекҡүлдән 45 йәшлек урядник Шаһабетдин Һөйөндөк улы Сабитов һәм 49 йәшлек зауряд-сотник Арҙашир Сабдикәй улы Бөширов әрме хеҙмәтендә 5 тапҡыр булған.

**Айыу ауылы** ошо исемле түбә үҙәге булып, 1798-1865 йылдарҙа 10-сы башҡорт кантонының 9-сы йортона ҡарай. XVIII быуат аҙағынан Айыу ауылы рәсми документтарҙа русса Медведево, XIX быуат башынан Старомедведево тип теркәлеп йөрөтөлә. 1722 йылда төрлө олоҫтарға ҡасып килгән татар, мишәр һәм мариҙарҙы эҙләкләү һәм тотоу өсөн Ҡаҙан юлына ебәрелгән отряд тураһындағы документта Айыу ауылы башҡорттары хаҡында ла мәғлүмәт бар. Был ауылға ебәрелгән поручик Милкович белдереүенсә, "той деревни башкирцы пришед к нему бранили и поносили его всячески, самовольно отбив у него сходцев".

1795 йылда был ауылдың бер өлөшөндә ҡырғыҙ, икенсеһендә гәрәй олоҫона ҡараған башҡорттар йәшәй. 1643 йылда уҡ гәрәйҙәр бында припущенник сифатында бер төркөм типтәрҙәрҙе индергән була. 1795 йылда ауылда 84 башҡорт, 93 типтәр теркәлә. 1834 йылда 122 аҫаба башҡорт Яңы Айыу ауылына күсә. 1859 йылда Иҫке Айыу башҡорттарының һаны 105, типтәрҙәрҙең 159 була.

**Иҫке Дөмәй һәм Яңы Дөмәй ауылдары** 12-се башҡорт кантонының 13-сө йортона ҡарай. Хәҙерге административ бүленеш буйынса Иҫке Дөмәй Илеш районы, ә Яңы Дөмәй Саҡмағош районы биләмәләренә индерелгән. Архивтарҙа Иҫке Дөмәй менән бәйле байтаҡ ҡына мәғлүмәт һаҡланған. Дөмәй исемле ауылдың Бүләр (йәиһә Йәнәй) олоҫонда булыуы билдәле. 1704-1711 йылдарҙағы башҡорт ихтилалын баҫтырыу барышында Ҡаҙан комиссары Сергеев ошо олоҫ башҡорттарын үҙенә саҡырып килтереп, улар араһынан 11 кешене тотҡонлоҡта ҡалдыра. Ҡулға алынғандар араһынан Яҡупбай, уның улы Мәмәт мулла, Ишғәли тигән кешеләрҙең исемдәре билдәле. Атабай исемле тотҡон төрмәлә астан үлә. Олоҫ старшинаһы Дөмәй ихтилалда әүҙем ҡатнаша. Тарихи документтарҙан билдәле булыуынса, Сергеев ихтилалда ҡатнашыусыларға ҡарата аяуһыҙ була. Бер документта Сергеев "разбил по реке Мензеле Дюмееву деревню всю и многия пожитки в ясыри взяли", тип бәйән ителә. Минзәлә төрмәһенән тотҡондарҙы Ҡаҙанға оҙаталар, унда әле иҫкә алынған Яҡупбай ҙа үлеп ҡала. Фельдмаршал Б.П. Шереметев иҫән ҡалған тотҡондарҙы ирекҡә сығара. 1706 йылда Дөмәй етәкселегендә Әстерханға фельдмаршал саҡырыуы менән килгән алты башҡортто Шереметев ярлыҡау тураһындағы үтенестәрен тапшырыу өсөн батшаға ебәрә. Әммә Мәскәүҙә был башҡорттар яуыз Сергеев ҡулына эләгә. Уларҙы Ҡаҙанға алып ҡайтып, ҡайтанан төрмәгә ябалар. Документта "привез их в Казань и держал их за караулом многие годы и ис тех челобитчиков вышеписанного Дюмея в Казани он повесил, для чего де они безведома ево, Сергеева, к императорскому величеству ездили", тип әйтелә.

Дөмәй Ишкәйевтың яҙмышы батша властарының башҡорттарға ҡарата алып барылған сәйәсәтенең иҫ киткес мәкерле һәм кешелекһеҙ булыуын күрһәтә. Күп кенә чиновниктар батшаға бунтҡа күтәрелеүсе башҡорттарҙы бөтә Рәсәй буйлап таратып ебәреп, уларҙың ерҙәрен тартып алырға күңәш итә. 1774 йылда тарихсы,Рәсәй Фәндәр академияһының агза-корреспонденты П.И. Рычков генерал-каратель П. И. Панинға бына ниндәй тәкдим яһай: "Поступить с башкирцами так, как поступали китайцы с целым и со здешной стороны против их не меньше людным зюнгарским народом, которым они совершенно овладев, развеяли ево по всей своей империи. Башкирцы этой меры заслужили. На изобильных из землях заселить людьми из других уездов".

1795 йылда Иҫке Дөмәйҙә 57 йортта 378 башҡорт һәм 1 йортта 11 типтәр йәшәгән, ә 1858 йылда 172 йортта 1093 кеше йәшәүе билдәле. 1920 йылда йорттар һаны 501-гә етеп, ауыл халҡының дөйөм һаны 2352-гә етә.

***Тарихи мәғлүмәттәр Әнүәр Әсфәндиәровтың "История сел и деревень Башкортостана и сопредельных территорий" китабынан алынды.***

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләнә.**

## АТА-БАБА АҠЫЛЫ




# ЙӘМҒИӘТ ТӘРТИПТӘРЕ

Быларҙың бөтәһенә лә мин, шул уҡ башҡорт вотчинниктары араһынан сыҡҡан һәм улар менән бергә ғүмер һөргән кеше булараҡ, старшиналыҡ иткән, ерҙәрҙе межалау һәм уға бәйле килеп тыуған бәхәсле мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса халыҡ вәкиле булған, Стәрлетамаҡ мәҙрәсәһендә рус теле уҡытыусыһы вазифаһын атҡарған саҡтарҙа күреп ышандым.

### Тәҡдимдәр

1. Ғәҙәтләнгән күсмә һәм һунарсылыҡ итеп йәшәүҙән ултыраҡҡа сығарыу өсөн иң тәүҙә башҡорттарға эш һөнәрҙәрен өйрәнеү кәрәк. Башҡорт халҡы беренсе сиратта итекселәргә, тегеүселәргә, төҙөү оҫталарына мохтаж. Һәр бер волоста бер нисәшәр мастерской төҙөү маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Аҡсаһыҙ, бигерәк тә аҙ ерле урындарҙа уларҙы төҙөүгә земство ярҙам итергә тейешле. Ә йәмғиәт һөрөнтө ерҙәре булдырғас, мастерскойҙар шуларҙың килеме иҫәбенә тотолорға тейешле.

2. Ер эшкәртеүҙе күтәреү өсөн иң тәүҙә уны мотлаҡ эшсе йән башына бүлеүҙе хәл итергә кәрәк. Ерҙе бүлеүҙе иһә биш-алты йыл һайын яңыртып тороу маҡсатҡа ярашлы булыр.

3. Мәжбүри рәүештә өс сәсеүле система индерергә, ә X ревизия буйынса йән башына 15 дисәтинәнән артыҡ тура килмәгән аҙ ерле дачаларҙа йәмғиәт тарафынан ерҙе арендаға биреүҙе ҡәтғи тыйырға кәрәк. Айырым хужа ерен бер йылдан артыҡҡа һатырға тейеш түгел. Әгәр кем дә булһа уның ерен ике-өс йәки унан да күберәк йылға ала икән, был һатып алыусыны ергә булған дәғүәнән бөтөнләй мәхрүм итергә.

4. Старшиналарға, судьяларға, писарҙарға, старосталарға, башҡорттар ғәскәри булған дәүерҙәге кеүек, ер бирмәскә, шулай уҡ арендаторҙар компанияларына ҡатышмаҫҡа. Әгәр улар аҫтыртын ғына быны эшләй икән, бер һүҙһеҙ эштәренән алырға.

5. Ер һатыуҙы, ғөмүмән, туҡтатырға, сөнки ул бик ҡиммәтләнде, аренданан да ҙур доход килә. Аҙ ерле дачаларҙа көтөүлектәрҙә лә, баҫыуҙарҙа ла сит малдарҙы йөрөтөргә рөхсәт итмәҫкә. Быға буйһонмауһыларҙы эре мөгөҙлө малдар өсөн 1-әр һум, ваҡ малдар өсөн 40-ар тин, ә ҡаҙҙар өсөн 10-ар тин иҫәбенән штрафҡа тарттырырға. Был аҡса йәмғиәт ҡаҙнаһына тапшырылырға тейешле.

6. Аҙ ерле дачаларҙа көтөүлектәргә, баҫыу һәм туғайға мал ебәрергә ҡул ҡуйыусыларҙы, приговор төҙөүселәрҙе волость судына бирергә. Ә күп ерле башҡорттарҙың көтөү йөрөтөү йә булмаһа сит кешеләрҙең малдарын көтөү өсөн буш ерҙәре бар.

7. Ҡырыҫ климатлы был крайҙа йылдың дүрт айын ғына файҙалы эш менән үткәрәләр. Ә ҡалған һигеҙен башҡорт нисек етте - шулай йәшәй. Рус мужигы ғүмерен эшһеҙ үткәрмәһен өсөн земстволар һөнәрселек училищелары һәм файҙалы эш йорттары ойошторалар. Бындай саралар башҡорттарҙың тормош-көнкүрешен яҡшыртыу өсөн дә бик кәрәкле. Айырыуса һуғыу, тегеү, столярлыҡ йорттары маҡсатҡа ярашлы. Тик уларға уҡытыусылар һәм надзирателдәр итеп миссионерҙарҙы ҡуймау хәйерләрәк, сөнки улай иткәндә, хөкүмәттең һәр бер эшенә, хатта ул үтә файҙалы булһа ла, халыҡ ышанып бармай, ҡаршылыҡ күрһәтә.

**(Дауамы. Башы 13-15-се һандарҙа).**

✓ *Ә бына Мәскәүгә барғас, тыуған илде һағыныу, моңдо юҡһыныу, рухи эҙләнеүҙәрем аша ҡанымдағы башҡортлоғом уянды һәм ҡурайҙа уйнап өйрәнеү теләге тыуҙы.*



# БЕҘ - ТАТАР
## башҡортлоҡтан

**Өфө урамы буйлап төрлөсә итеп һалынған йорттарға ҡарап, һоҡлана-һоҡлана атлағанда шундай уйҙарға ҡалаһың: ҡайҙа һәм нисек тыуа икән ошондай йорттарҙың һынланышы? Ғөмүмән, төҙөләсәк йорттарҙың, биналарҙың һын-килбәтен билдәләгәндә архитекторҙар ниндәй критерийҙарға таяна, ниндәй фекерҙе нигеҙ итеп ала? Әйтәйек, фекер, идея, һүҙ төҙөләсәк яңы йорттоң, бинаның асылын, йөкмәткеһен билдәләйме? Ғөмүмән, һүҙ, тел кешенең асыл күрһәткесе була аламы? Мәҫәлән, урыҫ, татар, инглиз, төрөк һәм башҡа телдәрҙә һөйләшкән башҡорттарҙы беҙ шул телдәрҙә һөйләшкәне өсөн генә башҡорт түгел тип әйтә алабыҙмы?**
**Был тәңгәлдә тағы ла бик күп һорауҙар теҙергә мөмкин булыр ине. Сәнғәт һәм әҙәбиәт өлкәһендә танылыу яулаған эшмәкәрҙәр Владимир Маяковский, Андрей Вознесенский, Георгий Данелия, Андрей Макаревич, Ирина Архипова һәм башҡаларҙың уңыштарының нигеҙе архитектура аша ла икәнлеген күптәр белә. Ғөмүмән, архитекторҙарҙың донъяға ҡарашы бик үҙенсәлекле. Быға һеҙ танылған архитектор, Рәсәй Архитекторҙар академияһы кәңәшсеһе Рудоль Рәйес улы ӘҮСӘХОВТЫҢ әңгәмәһен уҡығандан һуң инанырһығыҙ. Әгәр ҙә Әүсәховтың фекерҙәрен уҡыусы унын кем икәнен белмәһә, үҙен мотлаҡ фәйләсүф йә башҡа берәй гуманитар фән ғалимы тип танып ине. Уның Өфөлә, Сорғотта, Нефтекамала һәм Рәсәйҙең башҡа ҡалаларында төҙөгән 50-гә яҡын объекты бар.**

### Бер милләтте бәхетһеҙ итеп...

Һүҙҙең башында уҡ ошо хаҡта иҫкәртеү дөрөҫ булыр: минеңсә, бөтә хәрәкәт кешеләрҙе яҡынлаштырыу, дуҫлаштырыу һәм ярыштырыу рухында атҡарылырға тейеш. Теләйбеҙме-юҡмы, кешелек яйлап-яйлап ностратик дәүерҙәге берҙәмлеккә кире ҡайта бара кеүек. Был күренеште сәйәсмәндәр интеграция, глобалләшеү тип атай. Шул уҡ ваҡытта Ер шарындағы һәр бер милләт үҙаллы милләт, ойошма булып йәшәргә теләй: украиндың - урыҫ, урыҫтың - украин, чечендың - ингуш, ингуштың - чечен, башҡорттоң - татар, татарҙың башҡорт булғыһы килмәй. Милләттәрҙе яһалма рәүештә берләштереүҙең совет осоронда нимәгә алып килгәнен күрҙек, һөҙөмтәлә Ер шарының иң ҡеүәтле дәүләте тарҡалды. Сөнки Вавилондың емерелеүе миҫалынан тарихи һабаҡ алманыҡ. Минеңсә, милләттәр тик бер-береһен байытып, тулыландырып йәшәгәндә генә камиллыҡҡа ирешеп булалыр. Һәр бер милләттең иң яҡшы сифаттары ул милләттең үҙенә һәм башҡаларға, бар кешелеккә хеҙмәт итергә тейештер. Кеше тик уны уратып алған башҡа кешеләр бәхетле булғанда ғына бәхетле була ала, милләттәр ҙә шулай. Ер шарында айырым милләттең "Бәхет утрауы"юҡ. Икенсенән, Толстойса фекер йөрөтһәк, бер милләтте бәхетһеҙ итеп, икенсеһе бәхетле була алмай. Бер милләтте икенсеһе һаҡлап ҡала алмай, был бер кешенең икенсе кеше өсөн йәшәй алмауы һымаҡ уҡ - аксиома. Әммә бер милләт икенсеһенә зыян килтереүе мөмкин. Милләт организмы тәбиғилекте ярата, уға ҡарата "парник эффекты" ҡулланһаң, ойой башлай, деградация кисерә һәм тәбиғи үлеменә яҡынлай. Ул тәбиғи аралашыу шарттарында көрәшеп йәшәһә генә лайыҡлы йәшәй ала. Яңыраҡ Соловьев тигән доктор тураһында уҡыным. Ул кешенең баш мейеһен өйрәнеп, шундай һығымталарға килә: кешенең тормошон комфортлы итеүсе хәҙерге заман шарттары унын баш мейеһен деградацияға алып килә, һөҙөмтәлә ул үҙ сифаттарын юғалта. Милләт тә шулай. Бөйөк Ватан һуғышында Белоруссия тулыһынса тиерлек емерек хәлгә килә, һәр дүртенсе белорус кешеһе һуғышта һәләк була. Әйтергә кәрәк, ошондай ауыр шарттар белорустарҙы бергә туплай һәм улар ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә үҙ илдәрен киренән төҙөүгә, аяҡҡа баҫтырыуға өлгәшә.

Кешелек, милләт өсөн хеҙмәт итеүсе талантлы шәхестәрҙең башлыса күп балалы ғаиләләрҙә тәрбиәләнеп үҫеүе шулай уҡ тәбиғи үҫеш ҡанундары үтәлешенең асыҡ миҫалы. Күмәк балалы ғаиләлә тәрбиәләнеүсе балаларҙа коллективизм, бер-береңә ярҙам итеү, терәк булыу тойғоho һалынһа, бер-ике балалы ғаиләләрҙәге балаларҙың күбеһе эгоист булып үҫеүе күҙәтелә.

### Баймаҡтар ҙа... беҙҙең һымаҡ

Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары беҙҙең - илештәрҙең башҡортлоғона һәр ваҡыт көләмһөрәберәк ҡараны һәм ҡарай. Улар был осраҡта иң тәүҙә тел айырымлығын төп фактор итеп ала. Миңә лә шулай әйткәндәре бар. Мин ундайҙарға: "Кемебеҙ күберәк башҡорт икән, әйҙә, башҡорт халҡының тарихын ниндәй кимәлдә белеүебеҙ менән, һис юғы, ҡурай уйнап ярышып ҡарайыҡ", - тием. Уларға ҡурайҙа уйнап күрһәтһәм, аптырайҙар. Бына шулай, Илеш, ғөмүмән, көнбайыш башҡорттарының үҙ



асылынан ситләшеүенең төп сәбәптәренең береһе - әҙәби телдә һөйләшеүсе башҡорттар тарафынан үҙенеке итеп ҡабул ителмәүе лә.

Мин Илеш районының Яңы Күктау ауылында тыуып үҫтем. Бала сағымдан уҡ атайымдан үҙемдең башҡорт икәнлегемде бик яҡшы белдем. Үҫә биргәс, Ерҙең түңәрәк икәнлегенә, унда башҡа милләттәрҙең дә барлығына төшөндөм. Үҙемдең башҡортлоғомда мин ғаиләбеҙҙә саҡта шикләнмәнем, шиктәрем ҡайһы бер ауылдаштарҙың: "Беҙ - татарҙар, сөнки татарса һөйләшәбеҙ", - тигәне менән осрашҡас барлыҡҡа килде. Шикләнгән-икеләнгәндәр бөгөн дә күп. Мәктәпкә уҡырға барғас, шиктәрем тағы ла көсәйҙе. Сөнки беҙгә Һаҙи Таҡташты, Ғабдулла Туҡайҙы уҡыта инеләр, башҡорт шағирҙарын белмәнек. Беҙҙең телмәрҙәге башҡорт һүҙҙәрен, өндәрен уҡытыусыларыбыҙ "хата" тип төҙәтә килде. "Һин улай тип әйтеп, культуралы һөйләмәйһең, бына китаптарҙа нисек яҙылған, шулай уҡыһаң, культуралы була", тип аңлаттылар. Уҡытыусыларыбыҙға рәхмәтем ҙур, уларҙы ғәйепләп әйтеүем түгел. Улар ҙа ҡушҡанды эшләгәндәрҙер инде. Шулай итеп, беҙҙең яҡ башҡорттарының ҡанында булған башҡортлоҡтоң сабый саҡтарынан алып аҫҡы аңдан өҫкө аңға сығыр юлы башҡа төрлө ҡараштар менән бикләнә килде. Илеш башҡорттарының төп драмаһы бына ошонда. Шундай урынлы һорауҙар тыуа: беренсенән, беҙҙең төбәк башҡорттарының үҙ милли асылынан ситләшкән совет осоронда етәкселәр ни ҡараған? Икенсенән, был кемдер тарафынан ойошторолған сәйәсәт икән, ниңә ул һаман да фашланмай? Өсөнсөнән, был хәлгә беҙ нисек битараф ҡарай алабыҙ? Нимә генә тимә, үҙ республикаһында йәшәүсе республикаға исем биреүсе милләт вәкилдәренә ҡарата үткәрелгән бындай сәйәсәт ҡасан да булһа бер тапҡыр үҙ исеме менән аталып әйтелергә тейештер. Мин Татарстандың Аҡтаныш, Минзәлә яҡтарына балыҡҡа йөрөйөм, йыш ҡына урындағы халыҡ менән аралашырға тура килә. Уларҙың телендәге башҡорт тамыры Илеш башҡорттарына ҡарағанда ла күберәк һаҡланып ҡалғанын күреп аптырайым

Илеш кешеһе булыуым менән әле лә ғорурланам. Беҙҙең халыҡ ябай, асыҡ күңелле, егәрле, ергә йәбешеп ятыусы ҡаратырыш, үҙ хәләл көсөнә таянып йәшәүсе кеше. Совет осоронда районыбыҙ ауыл хужалығы продукцияһы етештереү, игенселек буйынса гел беренселәр рәтендә маҡталып телгә алынды. Юҡҡа ғына беҙ данлыҡлы баймаҡтар менән дуҫ түгелбеҙ. Баймаҡтан бер танышым: "Илештәрҙең һабантуйында булдым. Беҙҙең баймаҡтарҙан бер яғы менән дә айырылмайҙар. Ихластар, ҡунаҡсылдар, алсаҡтар, йөҙ, һын-ҡиәфәт буйынса ла тап беҙҙең баймаҡтар һымаҡтар. Тик ниңәлер үҙҙәре татарса һөйләшә?" - тип уйынлыысынлы итеп шаярткайны бер мәл. Сәнғәткә, йыр-моңға маһир баймаҡтарҙы бар донъя белә. Шулай ҙа пай ерҙәрен тараҡҡанда бушлай бер тапҡыр ғына бирелә торған ерҙән баш тартыусылар ҙа булған икән уларҙа. Шуға күрә мин ошо ике районды ң артабанғы бер-береһен тулыландырыу формулаһын түбәндәгесә итеп күрәм: илештәр баймаҡтарҙан башҡорт рухын, баймаҡтар илештәрҙән ер эшендәге ҡаратырышлыҡты алһын ине. Ошо шарт үтәлгән осраҡта, беҙ был ике район кешеләре араһында булырға тейеш идеаль дуҫлыҡ моделен күрер инек. Кем белә, бәлки, совет осоронда был ике район бер-береһенә дуҫлыҡ ҡулы һонған саҡта бындай маҡсат та күҙ уңында тотолғандыр.

### Башҡорт имиджы

Мин татар мәктәбен тамамлап, Өфө нефть институтына уҡырға индем һәм, әйтергә кәрәк, башҡортлоғомдо ул саҡта асыҡ уҡ тоймай инем әле. Ә бына Мәскәүгә барғас, тыуған илде һағыныу, моңдо юҡһыныу, рухи эҙләнеүҙәрем аша ҡанымдағы башҡортлоғом уянды һәм ҡурайҙа уйнап өйрәнеү теләге тыуҙы. Ул саҡта ҡурайҙың тауышын сығарыу һәм бер-ике нотаны ҡуша алыу минең өсөн ҙур мөғжизә һәм оло шатлыҡ ине. Шул уҡ ваҡытта ҡурайҙа апаруҡ һупалай башлап, ауылыма ҡайтып, класташтарыма белгәнемде уйнап ишеттергәс, улар был хәлгә һоҡланыуҙан бигерәк, аптырап, сәйерһенеп ҡараны, күптәре һаман да аңлап бөтмәйҙәр кеүек.

Эҙләп тапҡан барлыҡ архив материалдарында минең ата-бабаларым хаҡында "аҫаба, ерле башҡорттар", тип яҙылған. Бер ғаилә ағзаларының ҡайһыһы татар, йәиһә башҡорт булып яҙылыу осраҡтары бик күп беҙҙең арала. Мәҫәлән, минең өлкән ағайым Роберт татар булып йөрөй, ул үҙен шулай тоя, күрәһең. Беҙҙең төбәктә йәшәүселәрҙең күбеһе үҙ тамырҙарын юллап, шәжәрәләрен төҙөп, ата-олатайҙарының башҡорт булыуын белде, әммә көтөлгән һынылыш, башҡорт рухы балҡышы күҙәтелмәне тиерлек. Бәлки, был ҡапыл барлыҡҡа килмәйҙер, яйлап-яйлап рух, аң балҡышы булалыр. Кем белә, бәлки, быға са үҙен татар милләтенән тип белеп йөрөүсе ҡапыл ғына килеп үҙенең башҡортлоғон танырға ояла ла торғандыр. Аңды һындырыу еңел булһа ла, психологияны, ғәҙәтеңде, булмышыңды ҡапыл үҙгәртеү мөмкин түгелдер. Ябай ғына итеп әйткәндә, боронғо башҡорт халыҡ йырын аңлар, башҡарыр, йә ҡурайҙа уйнарға өйрәнер өсөн үҙлегеңде үҙгәртергә, булмышыңды эстән көйләргә кәрәк. Ә бындай үҙгәреш өсөн ваҡыт талап ителә. Мәҫәлән, йәһүдтәр Ер шарының төрлө дәүләттәрендә йәшәп, ниндәй генә телдәрҙә һөйләшһәләр ҙә, барыбер йәһүд булып ҡала беләләр. Беҙҙекеләр ана шул хәҡиҡәтте аңламай: имеш, улар татар теленә яҡын булған бер телдә һөйләшкәс, татар булып сығалар. Былай ҙа беҙҙекеләр Ҡаҙанға барһа, уларҙың һөйләшен татар телен боҙоп һөйләү, тип ҡабул итәләр. Һүҙ юҡ, милләттең нигеҙен тел тәшкил итә, әммә тик телде генә милләттең бөтә тулылығында кәүҙәләндереүсе итеп күрергә теләү - төптө хата. Телдән тыш, кешенең тағы ла күңеле һәм эске йөкмәткеһе, милли рухы, ғорурлығы бар.

Көҙ үтәсәк Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу сараһында беҙ тик ҡайһы милләт күпмене тәшкил итә, күпмегә артҡан, тигәнде генә күрергә теләйбеҙ. Мин был сараның әһәмиәте тағы ла киңерәк, тип уйлайым. Унда Рәсәй Федерацияһы республикаларында йәшәгән халыҡтарҙың үҙ республикаларының дәүләт идеяһын нығытыу мөмкинлеге лә бирелә. Шуға күрә киләсәктә Башҡортостаныбыҙҙың һаҡланып ҡалыуын теләйбеҙ икән, беҙ,

***Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары беҙҙең - илештәрҙең башҡортлоғона һәр ваҡыт көләмһөрәберәк ҡараны һәм ҡарай. Улар был осраҡта иң тәүҙә тел айырымлығын төп фактор итеп ала. Миңә лә шулай әйткәндәре бар. Мин ундайҙарға: "Кемебеҙ күберәк башҡорт икән, әйҙә, башҡорт халҡының тарихын ниндәй кимәлдә белеүебеҙ менән, һис юғы, ҡурай уйнап ярышып ҡарайыҡ", - тием. Уларға ҡурайҙа уйнап күрһәтһәм, аптырайҙар. Бына шулай, Илеш, ғөмүмән, көнбайыш башҡорттарының үҙ асылынан ситләшеүенең төп сәбәптәренең береһе - әҙәби телдә һөйләшеүсе башҡорттар тарафынан үҙенеке итеп ҡабул ителмәүе лә.***

✓ Уларҙың башҡорт булыуы - хәҡиҡәт, тик уларҙың башҡорт икәнлеген иҫбат итер өсөн татар булмауҙарын да иҫбат итергә кәрәк. Быына нисек килеп сыға был мәсьәлә.

# БУЛЫП БӨТМӘГӘНДӘР, китмәгәндәр…

Илештең аҫаба башҡорттары, "үҙебеҙ башҡорт, тик телебеҙ татарса булғас, татарбыҙ инде", тигән принциптан сығып эш итһәк, үҙебеҙҙе наҙан, сәйәси яҡтан һуҡыр, һаңғырау итеп күрһәтер инек. Икенсе яҡтан, Башҡортостанда башҡорттар күберәк, республика бай һәм көслө булғандан туғандаш Татарстанға ла, һис шикһеҙ, шатлыҡтыр ул.

Башҡорт кешеһе ниндәй генә телдә һөйләшһә лә, ҡайҙа ғына йәшәһә лә, ниндәй генә ҡатнаш никахлы ғаиләнең ағзаһы булһа ла, үҙ милли асылына тоғро ҡалһын өсөн иң беренсе нәүбәттә уның милли ғорурлығы булырға тейеш. Татарҙар матди донъяға, баҙарға яҡыныраҡ тора, минеңсә, башҡорттар иһә рухи ҡиммәттәрҙе беренсе урынға ҡуя. Донъя шулай ҡоролған: рухи донъя матди байлыҡты үҙһенмәй, шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер байлыҡҡа эйә булыр өсөн ҡайһы бер әхлаҡ сиктәрен урап үтергә лә тура киләләр. Шуға күрә, тик матди яҡтан уңышлы башҡорт кешеһе имиджы булдырыуға ынтылыу идеалистан материалист әүәләүгә тиң мәғәнәһеҙлек булыр ине кеүек.

## Ожмахыбыҙ - еребеҙҙә

Кешелек, ғөмүмән, абстракт төшөнсәләргә табынып йәшәп, үҙ табаны аҫтындағы Ерҙе онота бара. Тормош уңайлыҡтары, комфорт өсөн Ерҙең бар байлыҡтарын үҙләштерә, уны бысрата, йәшәргә яраҡһыҙға әүерелдерә. Әгәр ҙә кешелек тағы ла бер дин уйлап сығарһа, мин ул диндә төп урында Ер культын күрергә теләр инем. "Таҙа" материализмдан бөгөн кешелек ялҡа бара. Барлыҡ диндәр ҙә кеше менән кеше, кеше менән Аллаһы Тәғәлә, кеше менән йыһан мәсьәләләрен өйрәнә, әммә, миңә ҡалһа, табан аҫтындағы тупраҡ онотола. Бер дин дә Ерҙе һаҡлау предметы итеп ҡарамай. Ерҙе әсә менән сағыштыралар, әммә уны әсәләй яратып ҡарау ҡағыҙҙа ғына әле. Шул уҡ ваҡытта йыһан, мәңгелек категориялары күҙлегенән ҡарағанда, Ер күҙгә күренер-күренмәҫ, өрһәң осоп китерлек саң бөртөгө кеүек кенә. Әгәр ҙә уны кеше һаҡларға өйрәнмәһә, нимәләр генә эшләмә, цивилизация һәләкәткә осраясаҡ. Мин яңы дин бөгөн үк кәрәк, тип әйтмәйем, әммә Ерҙе һаҡлау буйынса бар диндәргә хас яңы уртаҡ концепция барыбер тыуырға тейеш.

Достоевский, "Матурлыҡ донъяны ҡотҡарыр", тигән. Килешәм, әммә мейеңдәге сүп-сарҙан ҡотолмайынса, матурлыҡтың һине килеп ҡотҡарырын көтөп ултырыу - мәғәнәһеҙлек. Аҡыллы, юғары интеллектлы, мейеләре тотош энциклопедия томдарын тәшкил иткән кешеләрҙе беләм, әммә уларҙың буш шешәне ергә ташлауҙарын, ергә сүп-сар ырғытыуҙарын күрһәм, күңелем ҡайта. Ергә тәмәке төпсөгө, сүп-сар ташлау - ул төпсөктө, сүп-сарҙы Аллаһы Тәғәләнең йөҙөнә бәреүгә тиң, тип уйлайым.

Поповщинанан дүнгән, күңеле ҡайтҡан Лев Толстой үҙ динен - "толстовщинаны" барлыҡҡа килтерә. Уның "Яуызлыҡҡа ҡаршы көс ҡулланып ҡаршы тормау" концепцияһы кешелек тарафынан бер төрлө генә ҡабул ителмәне. Яңыраҡ автобуста китеп барғанымда йәштәрҙең скиндхед ойошмаһы кейемендәге ике егеткә иғтибар иттем. Донъяны һәм кешеләрҙе яратмауҙары уларҙың йөҙөнә яҙып ҡуйылғайны. Улар бер мәл ултырған килеш аяҡтарын күтәреп, башҡаларҙы күрә алмауҙарын белдергән ҡиәфәттә хахылдап, хаиндарса көлөргә тотондо. Түҙмәнем, уларға иҫкәртеү яһаным, тегеләр миңә янай башланы. Автобуста кешеләр байтаҡ, улар араһында был ике егетте тиҙ генә туҡтатырға хәленән килгәндәре лә, хатта милиционер ҙа бар ине. Әммә улар, хәс тә Толстойҙың концепцияһына тоғро булғандай, алдан уҡ килешеп ҡуйған кешеләй, ошо яуызлыҡҡа ҡаршы тормау позицияһын һайланы. Тик бер ҡатын ғына уларға ҡаршы өндәшергә баҙнат итеп: "Үҙегеҙҙе наркомандар кеүек тотаһығыҙ", - тигәйне, береһе: "Ә һеҙ беҙҙең наркоман икәнлекте иҫбат итегеҙ, ҡайҙан беләһегеҙ, бәлки, беҙ шатлыҡтан шулай итәбеҙҙер", - тип ҡатындың үҙенә бәйләнә башланы.

Толстой ғүмере буйы йәшәү маҡсаты хаҡында уйланған. Диндә йәшәү маҡсаты шулай билдәләнә: "Аллаһы Тәғәлә ҡанундары буйынса йәшәү һәм ожмахҡа эләгеү". Хәҙер килеп, беҙ ожмахҡа эләгеүҙе йәшәү маҡсаты тип атай алабыҙмы икән? Йәшәү маҡсаты, минеңсә, камиллыҡҡа ынтылыу һәм үҙеңдән һуң ерҙә үҙең һымаҡ аҡыллы, моңло, аңлы тоҡом ҡалдырыуҙыр. Лев Николаевич үҙ балаларының тормош стилен күрә алмай, ахыры, һуңғы көндәрен уларҙан ситкә ҡасып үткәрә. Бына ниндәй бәхетһеҙлек...

Йәшәй килә, тағы ла бер нәмәгә инандым: ҡоро хәҡиҡәтте әҙәм балаһы кинәт кенә үҙләштерә алмай, хәҡиҡәт ялған менән йәнәш торғанда ғына, үҙенең ҡапма-ҡаршы мәғәнәле йөкмәткеһе менән сағыштырылғанда ғына хәҡиҡәт булып таныла алалыр. Киреһенсә булған осраҡта, үҙе генә булған ялғанды ла кеше хәҡиҡәт итеп ҡабул итеүе бар бит. Хәҙер инде Илеш башҡорттарын ошо концепция нигеҙендә ҡарайыҡ. Уларҙың башҡорт булыуы - хәҡиҡәт, тик уларҙың башҡорт икәнлеген иҫбат итер өсөн татар булмауҙарын да иҫбат итергә кәрәк. Быына нисек килеп сыға был мәсьәлә.

## Милли идея

Рәсәй - парадокстар иле, шағир әйтмешләй, "Уны аң менән генә аңлауы мөмкин түгел...". Уның парадоксаллеге төп Законы-Конституцияһында сағылыш тапҡан федераль асылына ҡаршы барыуында, унитаристик сәйәсәтендә лә күренә. Федераль Йыйылыш, Дәүләт Думаһы илебеҙҙәге аҙ һанлы, бөтөү, юғалыу сигенә еткән милләттәрҙе ҡурсалау, һаҡлау буйынса закондар ҡабул итеү урынына, атамаһында "милли" тигән һүҙ булған проекттар ҡабул итә. Яйлап-яйлап милли ихтыяждар, милләт хаҡындағы хәстәрлек тик айырым ғаиләнең ихтыяжына ғына ҡайтарылып та ҡалдырылмаҫ, тимә. Һәр хәлдә, төбәк компонентына башланған һөжүмде башҡа төрлө аңлап булмай.

Рәсәй составындағы ҡайһы бер милләттәр үҙ балаларына милли рухты Алла йортонда - мәсеттәрендә тәрбиәләргә лә әҙер. Шул уҡ ваҡытта намаҙ уҡыған һәр бер мосолманды террорсы тип атарға әҙер тороусылар бар сағында, мәсеттәрҙә лә туған телде, әҙәбиәтте, мәҙәниәтте уҡытыу еңел булмаясаҡ. Был осраҡта берҙән-бер таяныс булып нимә тороп ҡала? Эйе, ғаилә. Ғаиләнең төҙөлөү принцибы мөхәббәттә һәм ундағы ике кешенең ҡорған мөнәсәбәтенә бер ниндәй дәүләт тә, закон да ҡыҫыла алмай. Бер нисек тә аҡланмаған сәйәсәт, мәсеттәр, сиркәүҙәр емерелгән, дини руханиҙар юҡ ителгән совет осоронда беҙҙең күп кенә милли сифаттарыбыҙ ғаиләлә һаҡланып ҡалды. Милли ғаилә институтын тергеҙеү, һаҡлау һәм үҫтереү киләсәктә милләттәрҙе һаҡлауҙың төп ысулы ла булып ҡалыуы бар. Миҫалға йәнә йәһүдтәрҙе алайыҡ. Улар үҙ еренән ҡыуып ебәрелгәндән һуң, меңәр йылдар үҙ дәүләтселегенән, теленән, мәҙәниәтенән ситтә йәшәргә мәжбүр булған көйө лә, киренән үҙ ерҙәренә әйләнеп ҡайтып, Израилде төҙөүгә өлгәшә. Ошондай шарттарҙа улар нисек итеп үҙ асылдарын һаҡлай алған һуң? Әлбиттә, ғаиләлә, төҙөгән төп закондары-катехезисында ла милли булмыштарының төп һаҡланыу урыны һәм сараһы булып әсә институты һәм ғаилә һанала.

Тағы ла бер борсолоуымды әйтмәй булдыра алмайым, ул да булһа, ҡыҙ-ҡатындарҙың хоҡуғын ир-аттарҙыҡы менән тигеҙләү, феминизм күренеше. Ирҙәр менән ярышып, ҡыҙ-ҡатындар ирҙәрҙең насар ғәҙәттәрен үҙләштереп, репродуктив һәләттәрен юғалтыуға яҡыная бара. Ә был милләт яҙмышына балта сабыу менән бер. Бала тыуҙыра алмаған йәш ҡатындар күбәйеүе бик тә аяныс хәл.

Минең төрлө йәштәге дүрт ейәнем бар. Уларға әхлаҡ хаҡында нимә генә һөйләһәм дә, телевидение мин һөйләгәнде бер һелтәүҙә юҡҡа сығара ла ҡуя. Улар бөтә бәләкәстәр кеүек үк, йәнһүрәт ҡарарға ярата, ҡараған фильмдарында әхлаҡ мәсьәләләренә нормаль кеше күҙлегенән ҡараш бөтөнләй юҡ. Бер ҡарағанда, ул йәнһүрәттәрҙә изгелек еңеп сыға кеүек, әммә быға ниндәй юлдар менән ирешелә бит. Ундағы геройҙар бер-береһенең йөҙөнә һуға, автоматтан атыша, үлтерә, туҡмай, йәрәхәтләй һәм быларҙы ҡарап ултырыусы ейәндәрем оло кинәнес тойғоһо кисерә. Нисек кенә оптимист булырға тырышһам да, мин, мәҫәлән, ейәндәремдең кем булып үҫеп етеүҙәре хаҡында аныҡ ҡына әйтә алмайым, улар өсөн борсолам. Ошолай итеп кешелеккә ҡаршы алып барылған һуғышты кем туҡтатырға тейеш һуң?

Милли идея тигән терминға мин милләтте һәр төрлө шарттарҙа һаҡлап ҡалырға булышлыҡ итеүсе идеяны һалыр инем. Яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева үҙенең "Арғымаҡ" тигән хеҙмәтендә тап шул идеяның нигеҙен тәшкил итеүсе ете төшөнсә хаҡында һүҙ алып бара. Улар: Аң, Рух, Ғәм, Ырыҫ, Моң, Аҡыл, Ҡот төшөнсәләре. Һәр бер башҡорт үҙендә һәм ғаиләһендә ошо ҡиммәттәрҙе һаҡлай алһа, милләтебеҙ йәшәйәсәк. Шул уҡ ваҡытта яҙыусы был хеҙмәтендә милләтте һаҡлауҙың дәүләтселек механизмдары хаҡында һүҙ алып бармаһа ла, "Арғымаҡ"лы булғандарҙың үҙ милләтенең башҡалар араһында тиң булып йәшәүен күрһәткән дәүләтселеген һаҡлауҙы һәм үҫтереүҙе тәьмин итеүе был контекста былай ҙа аңлашыла. Беҙ үҙ милләт ағзаларында гуманлылыҡ өҫтөнлөктәре тәрбиәләргә бурыслыбыҙ. Мин милли идеябыҙҙы тап ошолай итеп күрәм.

Талантлы артист Кваша "Мине көт!" тигән бик яҡшы тапшырыу алып бара. Унда Ер шарының әллә ҡайһы өлөшөндә юғалып, аҙашып йөрөгән туғандар бер-береһен табыша. Үҙ милли асылынан аҙашып йөрөгән милләттәштәребеҙ ҙә, ҡайҙалыр аҙашып йөрөгән туғандарыбыҙ ҙа бар беҙҙең. Үҙ туғандары менән һыйыша алмай йәшәгән милләттәштеребеҙ ҙә юҡ түгел. Беҙ уларға күп осраҡта битарафбыҙ. Беҙҙең илдә "Ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡҡа ҡаршы көрәш" әле лә бар, һөҙөмтәлә был көрәш туғандар араһында һалҡынлыҡ тойғоһо тыуҙыра, туғандар бер-береһенә ярҙам итмәй йәшәргә өйрәнә. Туғаныңдан ҡурҡыу синдромы революция һәм Сталин дәүерендә лә көслө булды. Туғаныңды үҙең кеүек үк хөрмәт итеү, ололарҙы ҙурлау бөтә диндәрҙә лә хуп күрелә һәм ул милләт үҫешенең ҙур нигеҙе. Конфуций әйтеүе буйынса, туғандар араһындағы дуҫлыҡ бөтә милләттең, донъяның тыныслығына килтерә.

## Сәнғәт, мәҙәниәт, туризм…

Башҡорттоң донъяға ҡарашы мосолманлыҡтан, суфыйсылыҡтан, мәжүсилектән дә киңерәк, донъя халыҡтары өсөн ҡыҙыҡлы, фәһемле. Шуға күрә уны өйрәнеү, донъяға таратыу ҙа беҙҙең өсөн тик файҙа ғына килтерер ине. Башҡорт сәнғәте һәм мәҙәниәте кешелек донъяһы өсөн экзотик булыуы менән дә ҡыҙыҡлы. Рерих "Сәнғәттән дә юғарыраҡ көс юҡ", тип иҫәпләгән. Ысынлап та, Рафаэль, Микеланджело, Леонардо да Винчи йәшәгән дәүерҙең хакимдарын, иң бай кешеләрен берәйегеҙ иҫләйме, хәтерләйме? Был хаҡта шул замандарҙы махсус өйрәнгән тарихсылар ғына белеүе ихтимал. Ошо күҙлектән ҡарағанда, башҡорттар Ер шары халыҡтары араһында фәлсәфәүи һәм әҡлаҡи уникаль мәҙәни мираҫҡа эйә булараҡ иғтибарға лайыҡ. Дөйөм мәҙәниәт күҙлегенән ҡарағанда, быны экзотика тип тә атап була, әммә беҙ шул бай мәҙәниәтебеҙҙе һәм сәнғәтебеҙҙе үҙебеҙгә хеҙмәт иттерә белергә тейешбеҙ. Бының өсөн, йәғни Ер шарының һәр бер төбәгендә йәшәүсе кеше беҙҙең сәнғәтте һәм мәҙәниәтте күрергә ашҡынып торһон, беҙгә килә алһын өсөн беҙгә донъя стандартына тап килгән туризмды үҫтереү мотлаҡ. Туризмды үҫтереү, беренсенән, тыуған еребеҙҙе, урмандарыбыҙҙы, ҡая-тауҙарыбыҙҙы, йылға-күлдәребеҙҙе донъя капиталы ҡулына күсеүҙән һаҡлап ҡалыр ине, икенсенән, был юл менән беҙ сәнғәтебеҙҙе һәм мәҙәниәтебеҙҙе үҙебеҙгә хеҙмәт иттереү юлдарын табыр инек. Был эш башланған да инде, уңыштар теләргә ҡала.

Ауылыбыҙға ҡайтһам, мотлаҡ зыяратҡа барам, әруахтар менән аралашам. Ауыл халҡы менән күрешкәндә бер хәлгә иғтибар итәм: беҙ бала саҡта йәшәгән халыҡ ҡына түгел хәҙер унда. Ауылыбыҙҙың этник составы ярайһы уҡ үҙгәргән. Төрлө яҡтан төрлө кешеләр килеп, ауылды төйәк иткән. Ситтән килеүселәрҙең күбеһе ваҡытында Урта Азияға, Ҡаҙағстанға китеп кире ҡайтыусылар йәки уларҙың балалары, йә ейәндәре, йәғни сит телдә һүҙ аҡтарыусылар. Уларҙа беҙҙеңсә милли аң, рух бөтөнләй юҡ тиерлек. Ундайҙар менән кемдәр шөғөлләнергә тейеш һуң? Элекке ваҡыт булһа, тәбиғи ерле аралашыу мөхите уларҙы беҙҙең рухта тәрбиәләй, тип ҡәнәғәтләнер инек. Хәҙер иһә, ундайҙарҙың һаны күбәйеп китһә, киреһенсә, ауылдың рухи күсәре улар яғына ауыуы бар. Был бик ҙур һәм ауыр проблема, әйтер инем, бер беҙҙең ауылға ғына хас күренеш түгел, бик күп ауылдар шул хәлдә. Ауыл милләттең, мәҙәниәттең тәү нигеҙе, шуны онотмайыҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт халыҡ йырҙарын, ҡурай моңон, киң күңелле башҡорт халҡын үлеп ярата Рудоль Рәйес улы, халыҡ моңо, ҡурай яңғыраған концерттарҙа һәр ваҡыт уны осратырға була. Үҙе әйтмешләй, милли булмышына, асылына ҡайтҡанға күрә, милли тормошобоҙҙо оло танһыҡ күреп йәшәй ул. Әйтергә кәрәк, бының менән ул бәхетле лә...**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

***✓ Унының фамилияһы ла бит тарихи - Волков. Бүре һүҙенән яһалған. Элек, бик боронғо замандарҙа, мәжүсилек тигән осорҙарҙа беҙҙең башҡорт ата-бабаларыбыҙ бүрегә табынған. Тимәк, был да юҡҡа түгел...***




***Ике шиғри китап, күп һанлы проза әҫәрҙәре авторы Мөнәүис Низами (Низаметдинов) Илеш районының Сүлте ауылында тыуып үҫкән. Хәҙерге ваҡытта "Нурлы Илеш" дини гәзитенең баш мөхәррире.***

Үҙе генә белгән мең борсолоуҙары менән тереклек итеп ятҡан Баҙтуғай ауылын да оло илдә барған үҙгәрештәр урап үтмәне. Тормошта йыш ҡына ҡабатланып торған шундай бер мәшәҡәттең елдәре бында ла килеп етте лә, оло донъянан ситтә, Тәңре тарафынан онотолғандай, ҡар аҫтында тыныс ҡына үҙ тормошо менән йәшәп ятҡан ауылдың билдәле бер тәртипкә һалынған йәшәү рәүешен бер аҙ йәнләндереп тә алды.

Бына район башлығы, унының ҡаршыһында сәстәре менән ер һеперергә әҙер торған төрлө "зам"дар тарафынан район үҙәгендә арт яҡтары "борослап" ебәрелгән ауыл башлыҡтары, активистар, төрлө вәкилдәр үҙ биләмәләренә - ауылдарына сапты. Бына "силсәүит" тигән авторитет ауыл өҫтөнә хәбәр тондорҙо:

- Иртәгә йыйылыш! Һайлау йәшендәге бар кешегә лә килеү мәжбүри!..

Бына фуфайкаһын, аяҡтарындағы сүсинкәләрен һалып, шкафта күптән кейелмәй торған яҡшыраҡ кейемдәрен кейеп алған халыҡ йыйылышҡа ағыла. Сөнки илдә ниндәй генә власть алышыныуға ла ҡарамаҫтан, унан ҡот осоп тороу беҙҙең халыҡтың мәңгелек мөһөрө. Был - ҡанда.

Район түрәләренең ауылдағы төп таянысы - мәктәп коллективы. Оҙаҡ ҡына ҡатын-ҡыҙҙар менән идара иткән һәм үҙе лә күптән ҡатын-ҡыҙҙарса фекер йөрөтә башлаған өйләнә алмай ҡартайған мәктәп директоры ҡамыш кеүек аумаҡай Маликты ике яҡлап ҡыҫа:

- Кәрәк булһа, мәктәбегеҙҙе лә, үҙегеҙҙе лә юҡҡа сығарырмын! - тип аҡыра. Түрәлек баҫҡысы тағы ла түбәнгәрәк төшә. Бына үҙ сиратында мәктәп директоры егермеләп уҡытыусыны, мәктәптең техник хеҙмәткәрҙәрен ҡаршыһына баҫтыра. Талап ҡәтғи:

- Кемдәрҙең киләһе уҡыу йылында дәресле булғыһы килә? Кемдәрҙең мәктәп иҙәнен йыуыуҙан мәхрүм ҡалғыһы килмәй... Явка йөҙ ҙә ун процент булырға тейеш, - ти ул.

Йөҙ проценты аңлашыла, ҡалған ун проценты иһә - юғары синыф уҡыусылары. Улар йыйылыш ваҡытында ауыл клубының артында буш ҡалған урындарҙы тултырырға тейеш. Шуныһы ла бар: мәктәп бөгөн ауылда эш хаҡы түләгән һирәк ойошмаларҙың береһе, ә был рычагтың ниндәй тәьҫиргә эйә булыуын һөйләп торорға түгел. Билдәләнгән сәғәткә халыҡ клубҡа йыйылып бөттө. Бушлай концерт та була, тигәс, беренсе рәттәргә өйҙәге мең мәшәҡәттәрен ҡалдырып килгән ҡатын-ҡыҙ, төрлө йәштәге пенсионерҙар инеп тулды. Тышта тәмәке быҫҡытып, донъя хәлдәрен һөйләшеп торған ағай-эне лә әкренләп урталағы ултырғыстарға сүкәйҙе. Силсәүит ойоштorған табында бер-ике рюмка "сәй" эсеп йылынып алған ҡыҙыл сырайлы абзыйҙар - район хакимиәте вәкиле, милицияның урындағы участка инспекторы, колхоз рәйесе, силсәүит һәм төрлө район ойошмаларынан тағы бер нисә туҡ сырай сәхнәләге өҫтәл артынан урын алды. Өҫтәге күҙҙәр менән аҫтағылары бер аҙ ҡарашып тороп, бер-береһен өйрәнгәс, йыйылыш башланды.

Район хакимиәте исеменән сығыш яһаусы һүҙҙәренән халыҡ шуны белде. Тиҙҙән Рәсәй Дәүләт Думаһына һайлауҙар буласаҡ икән. Был ил күләмендәге мөһим кампанияла баҙтуғайлыларҙың ҡатнашыуы һәм үҙ һүҙен әйтеүе бик кәрәк икән. Унда беҙҙең район халҡы берҙәм рәүештә Сергей Волков тигән кешене күрһәтергә тейеш икән. Сөнки ул ғына беҙҙең турала уйлай, йәғни, әҙәмсәрәк әйткәндә, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғырта. Ҡайһылыр район дауаханаһына ниндәйҙер тикшеренеү-диагностика аппараты алып биргән, ти. Ә бер район мәктәбенә "быушный" булһа ла өс компьютер бүләк иткән икән. Әгәр һайлана ҡалһа, беҙҙең районға ла нәмәләр алып бирмәксе ти был бай әҙәм. Артабан, башынан да йыуаныраҡ, май баҫҡан итләс муйынына батып кергән галстук элмәген бер аҙ бушатып, өҫтәлдәге графиндан һыу һалып эскән район башлығы урынбаҫары илдең, республиканың бөгөнгө тормошо тураһында бәйән итә башланы. Рәсәй күләмендә сәскә атҡан эскелек, наркоманлыҡ, фәхишәлек, аҡса һәм ер өсөн кеше үлтереү беҙҙең араға ла үтеп инә башлаған, имеш. Ошо кире күренештәрҙе, бер ни булмағандай, үҙебеҙҙең закондарға таянып атҡарып ятҡан мафияға ҡаршы күтәрелергә Волковтан да ҡыйыуыраҡ кеше юҡ икән, тигән һығымта яһаны сығыш яһаусы. Артабан һөйләүсе вәкилдәр ҙә районды социаль тормошон яҡшыртыу өсөн ул әҙәмде депутат итеү кәрәклеген алға һөрҙө. Улар ғына ла түгел, әгәр ул һайланмаһа, пенсия ла булмаясаҡ, эш хаҡы тотҡарланасаҡ, аптекала тейешле дарыуҙар юғаласаҡ һәм башҡа күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән насарлыҡтар башҡа ишеләсәк икән. Райондыҡыларҙың һүҙҙәре шуның менән бөттө. Клубта шомло тынлыҡ урынлашты. Һуңғы ваҡытта бик йыш үткәрелгән һайлауҙарҙан тамам ялыҡҡан халыҡ өндәшмәй ултыра бирҙе. Был минутта ябай халыҡ араһынан район вәкилдәренең һүҙен ҡеүәтләп һүҙ әйтеүсе бик тә кәрәк.

Көтөлмәгән күңелһеҙ хәлдән мәктәп директоры Малик ҡотҡарҙы:

- Беҙ ҡулдан килгәндең барыһын да эшләйәсәкбеҙ... Бөтә коллектив менән... Район хакимиәте һүҙе беҙҙең өсөн - закон. Беҙҙең уҡытыусылар агитатор булырға ла риза, һайлау комиссияһында ла эшләйбеҙ... Беҙгә бер нәмә лә кәрәкмәй... Беҙҙең фекер менән ҡыҙыҡһынғандары өсөн район хакимиәте башлығына сикһеҙ рәхмәт, был беҙгә оло дәрәжә, - тип теҙҙе. Бына мәңге һалмыш йөрөгән ферма ҡарауылсыһы Зарифулла ниҙер әйтмәксе булып ғәйрәтләнеп тороп баҫты. Тыуымыштан да ҡылыйыраҡ, үҙ ғүмерендә эскән араҡынан да ике күҙе ике яҡҡа ҡараған был әҙәм, нисектер, залдағыларға ла, өҫтәл артындағыларға ла бер юлы ҡараған кеүек ине. Әммә уны, сығышы силсәүит планында ҡаралмағанлыҡтан, сабыуынан тартып бик тиҙ урынына ултырттылар. Айырым ғына сығыш яһауҙан ҡурҡһалар ҙа, клубҡа йыйылған халыҡ башын аҫҡараҡ йәшереп, нәмәгәлер ризаһыҙ шаулашып алды:

- Элекке замандар түгел хәҙер...

- Үҙебеҙ белербеҙ кемде һайларға...

- Уларҙың береһененең дә файҙаһы юҡ...

- Һайланғансы ғына йөрөйҙәр ҙә, унан юҡҡа сығалар...

- Үҙебеҙҙең кеше кәрәк, ниемә беҙгә урыҫ?..

Силсәүит, йыйылыш кәрәкмәгән йүнәлеш ала күрмәһен, тигәндәй, ҡорт саҡҡандай, ашығып урынынан һикереп торҙо һәм ни өсөндөр район вәкилдәренә рәхмәт белдерә башланы...

* * *

Мәктәп уҡыусылары тарафынан әҙерләнгән тамашаны мөкиббән китеп ҡарап ҡалған ҡатындарын клубта ҡалдырып, ирҙәр шыпырт ҡына урамға тәмәке ыҫландырырға сыҡты. Сигареттарын ҡабыҙып, эске бер ләззәт менән тәрән итеп бер нисә тапҡыр һурғас, "Һин был турала нисек уйлайһың?" тигәндәй, барыһы бер юлы тире йыйыусы Хатипҡа төбәлде. Ә тиресе тап бына ошо мәлдән нисек тә нығыраҡ рәхәт сигеп ҡалырға теләгәндәй, өндәшмәй генә тәмәкеһен һура бирҙе. Ауылдаштары араһында уҡымышлылығы менән даны сыҡҡан Хатип белә, ирҙәрҙең ҡыҙыҡһыныуы һуңғы сиккәсә тартылған йәйә керешендәй хәҙер. Ошо мәлдә мужиктарҙы йәнең теләгән яҡҡа йүнәлтергә мөмкин. Быңдай сәйәси йыйылыштарҙың иң ҡыҙыҡ дауамы ла, ғәҙәттә, тап ошонда, клуб ҡаршыһында тәмәке көйрәткәндә була. Шуларҙы иҫкә алып, силсәүит менән колхоз рәйесе Хатипты кистән ләх булғансы һыйлағайны.

Уҡымышлы, тигәндән, Хатип бер ниндәй ҙә юғары уҡыу йорто бөтөрмәгән уныһы. Унының белем багажы - һигеҙ йыллыҡ мәктәп һәм район үҙәгендә урынлашҡан һөнәри училище. Тик башҡаларҙан айырмалы, бер шөғөлө - китап уҡыуға әүәҫлек уны шулай ауылдаштары араһында "уҡымышлы" иткән. Хатип хәҙер инде китаптарҙы район үҙәгендә урынлашҡан китапхананан алдырып уҡыуға күсте. Ул китаптың тематикаһына ҡарап тормай, барыһын рәттән уҡый. Пушкин лирикаһымы ул, ҡалын-ҡалын донъя ҡатын-ҡыҙҙары тураһындағы энциклопедиями, Марк Твен әҫәрҙәреме - уға барыбер. Был уҡыу сире өҫтөнә унының үҙ теле менән теләһә ниндәй кешене ауыҙына ҡаратып "яндыра" торған һәләте лә бар. Бына ул тартылып бөткән тәмәке төпсөгөн оҫта итеп ҡар һырынтыһы артына сиртте лә үҙенә ҡарап ҡатҡан мужиктарға өндәште:

- Егеттәр, мәсьәлә сетерекле, бер яртыһыҙ хәл итеп булмай. Иң башта кеҫә төптәрен ҡырыштырып, берәйһен Һуҡыр урамға ебәрәйек...

Ошо фарман әлеге ваҡытта иң мөһиме булғанлыҡтан, шуны ғына көткәндәй, барыһы ла дәррәү рәүештә кеҫәләренә тығылды. Өс шешәлек булып йыйылған аҡсаны, үҙендә мәңге аҡса булмағанлыҡтан, тамаҡ ялына йомошҡа йөрөй торған Хәбиргә тоттороп, самогон һатыусыға йүгерттеләр. Хатип тағы бер тапҡыр үҙенә ҡарап төбәлгән ирҙәр төркөмөнә ҡайҙандыр юғарынан ҡараш ташланы ла, "Һүҙ башларға ваҡыт етте, буғай" тигәндәй, тамағын ҡырып алды.

- Бына һин, Сәлихйән абзый, электән, партия заманынан һайлауҙарға йөрөгән кеше бит инде, - тип арала иң өлкәндәрҙән булған абруйлы ветеранға төбәп, һүҙ башланы Хатип. - Шулай булғас, беләһең инде. Һайлау ул саҡтарҙа байрам була торғайны. Иртән тороп, һәр кем өй ҡыйығына парторг биргән ҡыҙыл флагты элеп ҡуя. Унан һуң, матур кейенеп, бисәһен ҡултыҡлап клубҡа китә. Ә магазинға, мин һиңә әйтәйем, ошо байрам уңайынан арзанлы араҡы килтереп тултырғандар. Ә бит көндөҙ сыра яндырып эҙләп тә ундайҙы таба алмаған замандарҙа был оло ваҡиға була торғайны. Бына шулай, исемлектә булған бер генә кандидатты 99,99 процент итеп һайлайһың да, магазин аша ҡайтып, өйҙә байрамды дауам итәһең.

Тәмәке төпсөгөнә мул итеп төкөрөп, аяҡ аҫтына ташлаған ҡарт, яҡлау эҙләгәндәй, ирҙәргә күҙ һирпеп:

- Уныһы аңлашыла миңә. Бер генә кандидат ине. Ә хәҙер бит өсәү... Ҡайһыһын һайларға, тип баш ҡатҡан... Бына һин ошонда аңлатма биреп ҡара... - Кистән һыйланып һәм силсәүит тарафынан мәтриләп ҡуйылған уҡымышлы Хатип һаман "кәрәкле" кандидатты алға өҫтөрәне:

- Һуң әйттеләр бит... Волков... Һиңә тағы нәмә кәрәк? Суҡынып китһен, һайларға кәрәк. Һөйләнеләр бит. Бай... Районға ярҙам итәсәк, тип...

- Суҡыныуын ул тыуғанда уҡ суҡынғандыр. Уны беҙгә суҡындыраһы юҡ... Һин бына уҡымышлы кеше тигән даның сыҡһа ла, һаман район түрәләренең һүҙен һөйләйһең... Ә нишләп башҡа кандидаттарҙы һайламаҫҡа? Улар нәмә, мөгөҙләмө ни? - Был һорауҙың хужаһы йәш саҡтарын оҙон аҡса артынан ҡыуып, Себер яҡтарында юғалтып ҡайтҡан, төплө ғаиләһе лә, торор урыны ла булмайынса, ҡартәсәһенән ҡалған мунса кеүек кенә өйҙә йәшәп ятыусы Фәүҙәт зимагур ине.

Ауыҙын трактор торбаһы кеүек күккә табан һуҙып, тәмәке төтөнөнән дүңгәләктәр сығарып тороусы Барый ҙа һүҙгә ҡушылды:

- Уларҙың береһенән дә файҙа көтәһе юҡ. Тик ниңә Волков? Ниңә, әйтәйек, к примеру, шул уҡ башҡорт Ишемғолов, йә иһә татар Латыпов түгел? - Әңгәмәлә быңдай йүнәлеште бер нисек тә көтмәгән Хатип үҙенә теләктәш булырҙай сырайҙарҙы эҙләгәндәй, тирә-яғына ҡаранып алды.

- Бына мин һеҙгә кандидаттарҙың фамилияһы буйынса ғына ла ябай аңлатма бирәм... Башҡорт, татар - ул беҙҙә генә кеше, ә Мәскәүгә барһа, уларҙы унда этем дә танымай. - Тиресе "шәп әйттемме" тигәндәй, инде өсөнсөгә тәмәке ҡабыҙған ирҙәргә ҡарап алды. Бер һүҙ ҙә өндәшмәй генә тәмәке һурған ирҙәрҙе "рисалаттым" тип уйлап, тағы ла шуны өҫтәне:

- Унының фамилияһы ла бит тарихи - Волков. Бүре һүҙенән яһалған. Элек, бик боронғо замандарҙа, мәжүсилек тигән осорҙарҙа беҙҙең башҡорт ата-бабаларыбыҙ бүрегә табынған. Тимәк, был да юҡҡа түгел...

Шул саҡ эшкә лә, ашҡа ла бер күфәйкә кейеп, май башына тиклем башындағы бүрегенең ҡолаҡсындарын күтәрмәй йөрөй торған бәләкәй генә буйлы Закирҙың тауышы ишетелде:

- Кем нисектер, ә мин уны һайламайым... Хәҙер бит демократия заманы, һәр кем ирекле. - Барыһы ла кәрәкһә лә, кәрәкмәһә лә һүҙгә ҡыҫылырға яратҡан өсөн "баламут" ҡушаматы йөрөткән Закирға төбәлде. Тиресе бүреген һалып, башын ҡашығандай итте:

- Уныһы шулай... Илдә демократия. Тик ул бит һинең өсөн дә, минең өсөн дә түгел. Ул - начальство өсөн. Түрәләр беҙҙең менән ирекле рәүештә идара итһен өсөн. Һинең көнитмешеңде ҡайғыртҡанда Мәскәү менән аяҡ терәп һөйләшһен өсөн. Һиңә, мәҫәлән, демократия нәмә бирҙе? Һин элек тә бүрекле баламут инең, әле лә баламут...

Закир ғәйрәте ташып торған бәләкәй әтәс кеүек йәшеллезәңгәрле нескә тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе:

- Һин... Һин тире бабаһыры, тиктомалдан кеше мыҫҡыллама? Мин демократияны күрһәтермен һиңә...

Хатип та ҡыҙа башланы:

- Нәмә тинең, ҡабатла әле, хәйерсе баламут...

Клуб ҡаршыһында ойошҡан "стихийный митинг" ҡурҡыныс төҫ ала башлағанда ғына Һуҡыр урамға киткән "гонец" Хәбир килеп етте. Шул мәлдә үк алда көтөләсәк һайлау ҙа, кандидат Волков та артҡы планға күсте. Өс шешәне йыҡҡас та бер ҡарарға килә алмаған Баҙтуғай мужиктары Хәбирҙе тағы йүгертте. Әммә был утлы шыйыҡса ла ауыл ирҙәрен тәғәйен бер ҡарарға килтерә алманы. Береһе тиресе Хатипты, береһе баламут Закирҙы яҡлаған ике төркөм һуғыша яҙып, ҡараңғы төшә башлағанда ғына саҡ өйҙәренә таралышты. Был төндө ауылдың бик күп өйҙәрендә оҙаҡ ҡына ут янды. "Митинг"тан ярһып ҡайтҡан ирҙәр өйҙәгеләргә лә тейешле агитация үткәрҙе, күрәһең...

Икенсе көндө агитаторлыҡты мәктәп директоры Малик арҡаһында үҙ өҫтәренә алған уҡытыу-

сылар ауыл буйлап һибелде. Һәр кемдең тәгәйен үҙ урамы, өйҙәре бар. Барыһының дә телдәрендә Сергей Волков, ҡулдарында "кәрәкле кандидат"тың тормош юлын, уның бихисап күп изгелектәрен яҡтыртҡан буклеттар ине. Һәр бер өйгә инеп, үҙ икмәктәре өсөн көрәшкән уҡытыусылар тәмле теле менән һандуғастай һайрап ебәрә:

- Фәләнкәйем, төгәнкәйем... Һайлауға барырға кәрәк... Үҙ яҙмышыбыҙҙы хәл итәбеҙ.. Әгәр ҙә быныуы шаҡмаҡҡа ҡул ҡуйһаҡ, тормоштар тағы ла яҡшыраcаҡ... Пенсиялар артасаҡ... Ерҙәр һөрөләсәк... Игендәр үҫтереләсәк...

Уҡытыусыларҙың агитацияһы Хоҙайҙың һәр бирмеш көнөндә бахмурҙан интеккән эскесе Кәрәкә-Фәритте эсеүенән ташлатырлыҡ дәрәжәлә көслө ине. Әйтерһең, был Волков тигәндәре һайланыу менән Баҙтуғайға ҡайтасаҡ, буш ағыулыҡ бактары тутыған бөткән тракторҙарҙың тик торған һабандарына үҙе егелеп, әрем баҫҡан ерҙәрҙе һөрәсәк ине.

"Район түрәләренә кәрәкле һөҙөмтә булмаһа, дәресегеҙҙе киҫеп бөтәрәм", - тип, мәктәптә ултырған директорҙы бер минутҡа ла иҫенән сығармаған уҡытыусылар башҡаса булыуын күҙ алдына ла килтермәй ине, әлбиттә. "Күрһәтелгән кандидат үтергә тейеш", тигән тәкбир уларҙың аңын йәйге иртәләрҙә Баҙы йылғаһын ҡаплаған томан пәрҙәһеләй томалағайны. Төнгә тиклем ғаиләләрен зарыҡтырып ауыл өйҙәре буйлап сапҡан уҡытыусылар, икенсе көндә арманһыҙ булып, әммә Берлинды алғандай, мәктәпкә килеп ултырыуға, район үҙәгенән яңы фарман килеп төштө. Был телефонограмманың тексы ҡыҫҡа, ләкин ҡәтғи ине: "Барлыҡ һайлаусыларҙың да "Шул кандидатты һайлайым" тигән һүҙҙәре менән имзаларын йыйырға!" Был имзалы ҡағыҙҙар мотлаҡ ике данала (район хакимиәтенә һәм силсәүиткә) булырға тейеш икән.

Районға кәрәкле кандидат өсөн агитация үткәргәндә балаларға белем биреү кеүек эштәр бик ваҡ булып ҡалды. Үҙ сиратында балалар ҙа быға сикһеҙ шат ине. Уҡытыусылар яңынан ауыл буйлап таралды. Әммә имза йыйыу мәсьәләһе көткәндән күпкә ҡатмарлыраҡ булып сыҡты. Әлбиттә, нәмәгә ҡул ҡуйғандарын да белмәйенсә, имза һырлаусылар ҙа булды. Ҡайһы берәүҙәр февраль буранында өшөп-күшегеп йөрөгән уҡытыусыларҙы ысын күңелдән ҡыҙғанып, тейешле ҡағыҙҙарға бер һүҙһеҙ ҡул ҡуйҙы.

* * *

"Иртәгә һайлау була" тигән уйҙар менән ғәҙәттәге йоҡоға әҙерләнгән Баҙтуғай ауылына ла төн килде. Силсәүит тарафынан һайлау кабиналары, урналар, тейешле ҡағыҙҙар тағы бер ҡат диҡҡәт менән тикшерелде. Комиссия ағзаларына ҡат-ҡат күрһәтмәләр бирелде.

- Ҡарағыҙ уны, һайлау һөҙөмтәләре өсөн иң беренсе сиратта һеҙ, йәғни мәҫәләң, комиссия ағзалары яуап бирәсәк, - тип колхоз рәйесе, силсәүит, комиссия башлығы мөйөштәге мул һыйлы табын әҙерләнгән бүлмәгә үтте һәм һайлау фонды аҡсаһына әҙерләнгән өҫтәл артында төн уртаһына тиклем һыйланып, һайлауҙың уңышлы үтәсәгенә тамсы ла шикләнмәйенсә, өйҙәренә таралышты...

Иртәнге һигеҙҙә асылған һайлау участкаһынан төшкә тиклем кеше өҙөлмәне. Колхоз үҙәге булған Баҙтуғай ауылына тағы ла ике бәләкәй ауыл - Ҡараяр менән Әнсек ауылдары ла ҡушылғас, күпселекте тәшкил иткән һайлаусылар ағымы сәғәт дүрттәргә генә кәмене.

Бына сәғәт уктары киске һигеҙ тапҡырына килеп етте. Ишектәр йоҙаҡҡа бикләнде. Комиссия ағзалары дөбөр-шатыр урналарҙы бушатып, саштыр-боштор бюллетень ҡағыҙҙарын һанай башланы. Әммә, гонаһ шомлоғона ҡаршы, бер нисә тапҡыр һанап сығыуға ҡарамаҫтан, Баҙтуғай ауылында район түрәләренә кәрәкле кеше үтмәгән булып сыҡты. Был хәл барыһына ла аяҙ көндә йәшен һуҡҡандай тәьҫир итте. Тик ни булһа ла эш уҙған һәм уны бына ошо мәлдә, кисекмәҫтән төҙәтә башларға кәрәк ине. Район үҙәгендә үтәсәк "ябыҡ кәңәшмә"лә отчет тотасағын күҙ алдына килтергән силсәүиттең йөҙө башта ҡыҙарҙы, унан һуң көрән төҫкә инә башланы. Тауышына йәшелле-күкле ноталар сыҡты:

- Бер кем бер ҡайҙа китмәй... Пока теге бүре... тфү, шайтан алғыры... теге Волков тигән кандидат еңеп сыҡмайынса, ишектәрҙең йоҙағын асыу юҡ, - тип ҡулындағы бүлмә асҡысын һелкеп алды ул. Ошо мәлдә барыһына ла ауыр, бик ауыр булып китте. Күҙ алдарына мәктәп һәм унда ултырған Малик килеп баҫты. Кемдер "аңғыра һарыҡтар" тип аудаштарына ләғнәт яуҙырҙы. Кемдер халыҡты икенсе кандидат өсөн тауыш бирергә саҡырыусыларҙы эттән алып, этҡә һалып һүкте. Шулай эстәренә йыйылған асыуҙы бер аҙ бушатҡас, нисектер, еңел булып китте. Йән-фарман эшкә тотондолар. Тиҙ арала таҙа көйөнсә урнаға төшөрөлгән бюллетендар табылып, тейешле графаға билдә ҡуйып сығылды. Улай ҙа етмәгәс, башҡорт, татар милләтле кандидаттар өсөн тауыш бирелгән бюллетендарҙы боҙоу башланды. Тейешле һөҙөмтәгә ирешкәндә, сәғәт уктары иртәнге дүрт тапҡырында ине инде...

* * *

Бына яҙҙарҙан һуң гүзәл Йәйгә лә аяҡ баҫтылар. Закир-баламут менән Фәүҙәт-зимагурҙың быйылға бесәнлекһеҙ тороп ҡалыуҙарын иҫәпләмәгәндә, ҡыш үткән һайлауҙарҙың Баҙтуғай ауылы халҡына әллә ни йоғонтоһо булманы. Тормош, бәлки, шулай яңы һайлауҙарға тиклем барыр ҙа барыр ине. Әммә башҡа бик күп ауылдарҙағы кеүек, Баҙтуғай ауылында ла һәр бер өйҙә "телевизор" тигән тартма бар. Ә унан көн һайын ил яңылыҡтары, хәбәрҙәр тапшырып торалар. Тырыш Баҙтуғай халҡы кәртәҡураһынан, ырҙын-баҡсаһынан көндәр буйы кермәһә лә, көндәлек яңылыҡтарҙы ҡарай ине. Хоҙайҙың бер бирмеш көнөндә ошо тартманан ишеткән-күргән хәбәр ауылды тағы ла бер шаулатып алды. Ә зәңгәр экранда баштан-аяҡ ҡоралланған, баштарына ҡара битлек кейгән йәшел-сыбар кейемдәге ОМОН тигән милиция һалдаттары бик затлы кейенгән берәүҙе Американан Мәскәүгә ҡайтып төшкән самолеттан ҡаршы алды. Уның ҡулдарына шунда уҡ тимер бығауҙар кейҙерелде. Бына уның ҡара күҙлеген һалдырып, сырайын бөтә экранға яҡынайттылар. Телевизор ҡаршыһында ултырған Баҙтуғай халҡы "аһ" итте. Барыһы ла бер мизгелгә һүҙһеҙ ҡалды. Эйе, был сырай уларға бик тә таныш ине. Был уларҙың ҡыш Рәсәй Дәүләт Думаһына һайлаған депутаты ине. Эйе, эйе, экрандан оятһыҙ рәүештә йылмайғанда ялтыраған ауыҙындағы алтын тештәренә тиклем уныҡы ине. Ә телевизорҙан үҙ күҙҙәре менән күреп тә ышанырға теләмәгәндәрҙе ышандырырға теләгәндәй, сибәр дикторҙың яңылыҡтары яуҙы: "Ошо көндәрҙә сит илдән Мәскәүгә ҡайтҡанда ойошҡан енәйәтселеккә ҡаршы көрәш идаралығы хеҙмәткәрҙәре тарафынан "Интерпол" масштабындағы айырыуса ҡурҡыныс енәйәтсе Сергей Волков ҡулға алынды..." Артабан, ҡулға алыныусының бик күп енәйәттәрен һанап сыҡҡас, диктор баҙтуғайлыларға мөрәжәғәт иткәндәй, дауам итте: "Әлбиттә, ошондай кешене ваҡытында фаш итә алмау, бигерәк тә уны бер ни булмағандай депутатлыҡҡа тәҡдим итеү - бик оло сәйәси һуҡырлыҡ булып тора", - тип һүҙен бөтөрҙө ул.

"Күрәсәкте күрмәй, гүргә кереп булмай", тигәндәй, Баҙтуғай ауылы халҡы үҙенең эскерһеҙ, саф ауылса аңы менән был хәбәрҙе кескә ҡабул итә алды. Ер шарының иң ҙур өләшөн алып торған, Европа-Азия ҡитғаларында урынлашҡан һуҡырҙар йәмғиәтендәге кеүек, был ауылда ла тормош әкренләп үҙ ағышына ҡайтты. Ә тәгәрмәстәренең күптән дегете кипкән тормош арбаһы шалтор-шолтор килеп һаман алға тәгәрәне. Унда күңелдәрҙе ымһындырғыс нәмәләр бар кеүек...

ЗАУЫҠ

*Роберт МИҢНУЛЛИН*

# ОЛАТАМДАРҘЫҢ ҠАНЫ УЙНАЙ ҺИНДӘ,

## Шул бирмәйҙер һиңә тынғылыҡ...

**Татарстандың халыҡ шағиры, Ғ.Туҡай, М.Йәлил исемендәге дәүләт премиялары лауреаты, Андерсен исемендәге халыҡ-ара дипломға лайыҡ булыусы Роберт Миңнуллин Илеш районының Шәммәт ауылында тыуып үҫкән. Ул хәҙерге көндә Татарстан Республикаһының Дәүләт Советы депутаты.**



### Һағындыра һаман

Башҡорт далаһына, ҡунаҡ булып,
Йыраҡ юлдан килгәс көноҙон,
Башҡорт ҡыҙы, туҫтағына һалып,
Һуҙҙы миңә башҡорт ҡымыҙын.

Еңеләйеп ҡалды бөтә тәнем,
Бар телӘккә, гүйә, ирештем.
Әллә ҡымыҙ шулай шифа инде,
Әллә ҡыҙҙың ҡулы килеште.

Башҡорт далалары тылсым икән -
Үҙе моңло,
Үҙе тымызыҡ.
Һағындыра һаман шул даланың
Әллә ҡыҙы,
Әллә ҡымыҙы...

### Олатамдарҙың ҡаны уйнай һиндә

Бер тынмаҫ йән булдың инде, энем!
Тора алмайһың бер урында.
Һин йөшәйһең әле, әйтерһең дә,
Күсмә ҡәбиләләр осоронда.

Бер ҡарағанда, һин Әстерханда,
Йә Ҡаҙағстанда, йә Ҡаҙанда!
Йә Шәммәттә! Тик һаман да һиңә
Ниҙер етмәй, ниҙер аҙ унда.

Юлы булһа, ике уйлап тормай
Сығып китер инең айға ла.
Тик аңланың микән: шул уҡ икән
Донъя тигәндәре ҡайҙа ла.

Йыраҡ ерҙәр һине тарта һымаҡ,
Ҡайҙан килгән һиңә күсмәлек?
Ул, моғайын, йыраҡ быуаттарҙан -
Олатамдарҙан ҡалған иҫтәлек.

Дала етмәй һинең күңеленә,
Киңлек кәрәк һинең кеүеккә.
Арғымаҡтар кәрәк сабыр өсөн
Батырғансы ап-аҡ кубеккә.

Сығыр өсөн йыраҡ сәфәрҙәргә,
Торор өсөн һаман ыргылып...
Олатамдарҙың ҡаны уйнай һиндә,
Шул бирмәйҙер һиңә тынғылыҡ.

Тик беҙ күптән ултыраҡ тормошта шул,
Тура килә шунда ҡайнарға.
Әсәй тағы бик борсолоп яҙған -
Йыйынаһың тағы ҡайҙарға?

### Ҡыҙҙар-йырҙар

Йәшәгәндәр гүзәл Зөлхизәләр,
Зиләйлүктәр, һылыу Гөльямалдар.
Гөрләп торған улар ауаҙынан
Аулаҡ өйҙәр, өмә, гөл яландар.

Йырлағандар улар ҡасып ҡына:
Йырларға ла рөхсәт ителмәгән.
Илай-илай йырлағандар улар,
Тик йырҙары бөхет килтермәгән.

Ярат̨ҡандар ҡыҙҙар Зөһрә кеүек -
Яратырға ләкин ярамаған.
Йә ҡыҙҙарҙың аҡҡош йәнен яҙмыш
Теләгәнсә телгән, яралаған.

Әммә яҡты, матур өмөттәрен
Юғалтмаҫҡа ҡыҙҙар тырышҡандар.
Гүзәллек тә, хис тә, мөхәббәт тә
Бер моң булып йөндә
тулышҡандар.

Улар гүзәл булған! Гүзәл була
Халыҡ моңон йыйған күңел генә.
Йырға әүерелеп, берәм-берәм
Осоп киткән ҡыҙҙар бөгөнгөгә...

Улар йыр-моң инде. Ул йырҙарҙы
Ир-егеттәр йырлар, ҡыҙҙар йырлар!
Халҡыбыҙҙың йәне, бәгре булып
Күңелдәрҙә йәшәй ҡыҙҙар-йырҙар.

Моңдар тула йәнгә, күңел тула -
Ал ҡурайҙы, әйҙә, ал ҡумыҙҙы!
Ҡыҙҙар-йырҙар йыраҡ киләсәккә
Илтә бара туған халҡыбыҙҙы.

### Көй

*Рәми Ғариповҡа*

Ҡайта-ҡайта уҡып ятам
Дуҫтар биргән китабыңды.
Китабыңдан миңә тигән
Өр-яңы бер Көй табылды.

Күңелемдә көтмәгәндә
Күптән көткән Көй ҡабынды.
Ҡайнар ҡан тамырҙарымдан
Ҡайнарланып Көй ағылды.

Ҡайҙан таныш көй был, тиһәм,
Ул миндә ятҡан икән.
Нисә йылдар һиҙҙермәйсә
Минең ҡанда аҡҡан икән.

Рәхмәт һиңә - мин яҙаһын
Инде күптән һин яҙғанһың...
Үҙәк өҙгөс бер көй булып
Ҡайттың миңә һин яҙҙан һуң.

✓ *Эс ҡатҡан, йә, киреһенсә, эс китһә, һул яҡтан эс ауыртһа, фекалий һарыҡ тиҙәгенә оҡшаш булһа, геморрой ялҡынһынып, йәрәхәтләнеп торған осраҡтарҙа кисекмәҫтән врачҡа күренергә кәрәк.*



АРҘАҠЛЫЛАР



**Арҙаҡлы башҡорт зыялылары, халыҡ һөйөүен һәм ихтирамын ҡаҙанған алтын ҡуллы табиптарыбыҙҙың тамыры, бәхеткә күрә, ҡоромай: уларҙың изге һөнәрен улдары, ҡыҙҙары, ейән-ейәнсәрҙәре дауам итә. Медицина фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт медицина университеты профессоры Илдар Һиҙиәтовтың тормош юлы һәм эшмәкәрлеге тап ошо әйткәндең сағыу миҫалы ла инде. Эйе, күптәргә яҡшы билдәле был фамилия, әлбиттә, күренекле хирург, үҙенең изге эштәре менән халҡыбыҙ күңелендә йәшәүсе Ишмырҙа Хәйернур улы Һиҙиәтовты күҙ алдына баҫтырғандыр. Атаһы кеүек үк, даны таралған табип, алтын ҡуллы хирург, шулай булыуға ҡарамаҫтан, үтә лә баҫалҡы, кеселекле кеше булып сыҡты Илдар ҺИҘИӘТОВ та. Һөнәр оҫталығы ғына түгел, юғары әхлаҡ сифаттары ла күскән уға ата-әсәһенән.**

# ҺИҘИӘТОВТАР, ТИП ӘЙТЕҮ ЕТӘ...

## улар хеҙмәтенең баһаһын билдәләү өсөн

- Атайым - хирург, әсәйем Венера Фәрит ҡыҙы республикала тәүге аллерголог ине, улар көнө-төнө эштә булдылар, шуға ла мин Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында ете йәштән атайымдың әсәһе Рәйхана ҡартәсәйем тәрбиәһендә үҫтем, - тип һөйләй Илдар Ишмырҙа улы, бала сағы хаҡында һүҙ сыҡҡас. - Әйткәндәй, ҡартәсәйем шифалы ҡуллы бағымсы, халыҡ табибәһе булды. Сыҡҡан, ҡаймыҡҡан быуындарҙы ултырта, һылай, үләндәр менән дауалай ине һәм ауылда ғына түгел, тирә-йүндә даны таралған кендек инәһе булды. Уны өй беренсә саҡырып йөрөтә торғайнылар. Күрәһең, имселек, табип һәләте, шул уҡ ваҡытта уҡырға, белемгә ынтылыш нәҫелдән киләләр инде. Атайым тәүге һөнәре буйынса физик-математик булһа ла, аҙаҡ барыбер медицина буйынса китә.

Миңә 12-13 йәштәр тирәһендә беҙ Өфөгә күстек. Атайым хирург булараҡ танылып өлгөргәйне. Төндәрен шылтыратып, йыш ҡына уны операция эшләргә алып китәләр. Быйдай саҡырыуҙарға атайым мине лә алып йөрөр булды. Улар кеүек үк, битлек, халат кейеп, операция барғанын ҡарап тора инем. Унынсыла уҡығанда иһә операция ваҡытында медбрат сифатында ярҙам да иткеләй башланым, ғөмүмән, хирургия менән мауығып киттем. Мәктәпте тамамлағанда, шулай итеп, минең алда һөнәр һайлау мәсьәләһе тормай ине инде, мин күптән хирург булырға ҡарар иткәйнем. Медицина университетын тамамлап, хирург һөнәре алып, проктология буйынса махсуслашҡандан һуң, 20 йылдан ашыу Өфөнөң 21-се ҡала больницаһында эшләнем, унан Башҡорт дәүләт медицина университеты кафедраһына саҡырҙылар, унда оператив хирургия буйынса лекциялар уҡыйым. 1992 йылда - кандидатлыҡ, 1999 йылда докторлыҡ диссертациялары яҡланым.

**Илдар Ишмырҙа улы, күп йылдар проктология өлкәһендә эшләүсе хирург булараҡ, был төр ауырыуҙарҙың үҙенсәлеге, уларҙы дауалау һәм иҫкәртеү саралары хаҡында гәзит уҡыусыларыбыҙҙы ла бер аҙ таныштырып китһәгеҙ ине?**

- Үкенескә ҡаршы, йыуан эсәк сирҙәре менән яфаланыусылар һаны арта бара. Улай ғына ла түгел, был сир "йәшәрә", йәғни беҙгә хәҙер 20-30 йәшлек ауырыуҙар ҙа мөрәжәғәт итә башланы.

Мәғлүм булыуынса, ашҡаҙан һәм ашҡаҙан аҫты биҙе яман шеше менән бер рәттән, йыуан эсәк яман шеше иң хәүефле, ҡурҡыныс сирҙәрҙән иҫәпләнә. Шул уҡ ваҡытта, бәхеткә күрә, фән ҡаҙаныштары, медицина ла бер урында тормай, яңынан-яңы асыштар, яман сирҙәрҙән ҡотолоу йә булмаһа уны күпкә еңеләйтеү саралары тыуып тора. Мәҫәлән, беҙҙең илдә йыуан эсәк шеше диагнозы менән сирләүселәрҙең 40 проценты иҫән ҡалһа (ә уртаса донъя күрһәткесе - 65 процент), хәҙер иһә хирургия юлы менән дауалауҙың яңы, заманса алымдарын файҙаланып, был күңелһеҙ статистиканы яҡшы яҡҡа үҙгәртеү форсаты тыуҙы.

Әйткәндәй, мин бынан дүрт йыл элек тәҡдим иткән үҙенсәлекле ысул - оператив юл менән алып ташланған йыуан эсәктең ҡалған өлөшөн нәҙек эсәккә ялғау урынында резервуар ҡуйыу ауырыуҙың дөйөм хәлен күпкә еңеләйтте. 1996 йылда ошо проектым I премияға лайыҡ булды һәм миңә "Йылдың иң яҡшы хирургы" исеме бирелде.

**Оператив дауалау ысулдары нигеҙҙә профессионалдарҙың фекер алышыу предметы булһа, гәзит уҡыусылар иһә үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап алырға теләр ине, моғайын. Мәҫәлән, йыуан эсәк яман шеше нилектән барлыҡҡа килә, уны нисек итеп иртәрәк асыҡларға, ә иң яҡшыһы - был сирҙе нисек иҫкәртергә мөмкин?**

- Йыуан эсәк сей яраһы, тура эсәк яман шеше, ҡайһы бер осраҡта геморрой сирҙәре йыуан эсәктең яман шешенә килтереүе ихтимал. Дөрөҫөн әйткәндә, яман шештең аныҡ ҡына сәбәбен күрһәтеүе лә ауыр. Һәр организмда төрлөсә булыуы мөмкин: берәүҙәрҙең сиренә сәбәп булған фактор икенселәр өсөн ҡурҡыныс булмауы ла бар. Был бөтәбеҙгә лә мәғлүм һәм тәү ҡарашҡа ябай тойолған шундай факторҙар: стресс, экология, туҡланыу, аҙ хәрәкәтләнеү, эсәр һыу сифаты, нәҫелдән "мираҫ", һ.б.

Һуңғы йылдарҙа кешеләр һаулыҡ һаҡлау мәсьәләһендә күпкә хәбәрҙар була башланы, улар сир аҙып китмәҫ элек беҙгә мөрәжәғәт итә һәм шул арҡала тиҙерәк һауыға. Сирҙе иртәрәк асыҡлау өсөн нимәгә иғтибар итергә кәрәк? Иң тәүҙә кешене эс ҡатыу, йә китеү, ябығыу, тиҙәктәге ҡан эҙҙәре, эсәктәрҙең үткәрмәүсәнлеге, ҡан килеү һиҫкәндерергә тейеш. Бындай осраҡтарҙа тәмәке тартыу, араҡы эсеү, ҡыҙҙырылған һәм ҡырҡыу, әсе аҙыҡ-түлек ҡулланыу бик хәүефле.

Йыуан эсәктәге ваҡ шеш йә уларҙан торған төркөмсәләрҙе асыҡлау өсөн проктологҡа күренеп тороу мотлаҡ, сөнки был төр шештәрҙең клиник билдәләре үҙен бик белдереп бармай, уларҙы фәҡәт эндоскопия ярҙамында асыҡлап була. Америкала, мәҫәлән, 5 йыл һайын халыҡ массовый рәүештә мотлаҡ фиброколоноскопия тикшереүе үтә, ә беҙҙә, үкенескә ҡаршы, ундай программа юҡ. Шуға күрә һәр кемдең һаулыҡ торошо унын үҙенә бәйле. Һабаҡ булһын өсөн япондарҙы алып ҡарайыҡ. Донъя кимәлендә ашҡаҙан яман шеше менән иң аҙ һанда сирләүселәр - япондар. Ни өсөн, тиерһегеҙ. Сөнки уларҙа мәҙәнилек юғары. Үҙ һаулығынды һаҡлау йәһәтенән медицина тикшеренеүҙәре үтеп тороу, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыу, сәләмәтлек мәсьәләләрендә элементар кимәлдә булһа ла хәбәрҙарлыҡ - үҙенә күрә мәҙәнилек билдәһе бит ул. Беҙҙә ҡайһы берәүҙәргә ана шул сифат етешмәй, улар сир аҙып, эш үткәс кенә врачҡа килә. Сир башланыу ихтималлығын "хәбәр итеүсе" ҡайһы бер билдәләрҙе тағы ҡабатлайым: йә эс ҡатҡан, йә, киреһенсә, эс китһә, һул яҡтан эс ауыртһа, фекалий һарыҡ тиҙәгенә оҡшаш булһа, лайла, ҡан бүленеп сыҡһа, геморрой ялҡынһынып, йәрәхәтләнеп торған осраҡтарҙа кисекмәҫтән врачҡа күренергә кәрәк. Әлбиттә, был симптомдарҙың бөтәһе лә яман шеш хаҡында һөйләй, тип тә хәүефләнергә ярамай, шулай ҙа тикшерелеү мотлаҡ.

Дөрөҫ туҡланыу, тигәндән, еңел үҙләштерелеүсе күҙәнәклекле аҙыҡ: ҡара һәм көрпәле икмәк, емеш-еләк, йәшелсәне күберәк ҡулланырға кәңәш итер инем.

**Илдар Ишмырҙа улы, ауыртыуһыҙ, операцияһыҙ геморройҙы дауалайбыҙ, тигән рекламаны йыш ишетергә тура килә. Был турала ни әйтерһегеҙ?**

- Геморройҙың III-IV стадияһын операцияһыҙ дауалау мөмкин түгел. Реклама һәр ваҡыт иң тәү сиратта коммерция мәнфәғәтен күҙәтә. Был сирҙе ҙур стационарҙарҙа квалификациялы врачтар күҙәтеүендә дауаларға кәңәш итәм. Беҙҙә бындай операциялар әлегә түләүһеҙ, яңы төр алымдар беҙҙә лә уңышлы ҡулланыла.

**Табип Һиҙиәтовтарҙың ғаилә династияһын артабан дауам итеүселәр бармы? Төп һөнәрегеҙҙән тыш, яратҡан шөғөлөгөҙ ниндәй? Ғаиләгеҙ хаҡында бер кәлимә һүҙ әйтһәгеҙ ине?**

- Ҡатыным Ирина - генетик, профессор. Ике ҡыҙ бала үҫтерәбеҙ. Өлкәнебеҙ Индира медицина университетын тамамлай, офтальмолог булырға йыйына; икенсе ҡыҙыбыҙ Инна мәктәптә уҡый әле.

Бөгөнгөләй тотороҡһоҙ мәлдә аяуһыҙ тормош темпынан бер аҙ арынып, стресс сығарыу өсөн һәр кемдең дә күңеленә яҡкан шөғөлө булырға тейештер ул. Мин, мәҫәлән, һунар яратам. Бының өсөн йышыраҡ Әбйәлил районына барам, ә ғәмәлдә гүзәл Башҡортостаныбыҙҙы инләп-буйлап сыҡҡанмын. Йәнлек аулауҙан бигерәк, мин тәбиғәт ҡосағында онотолоуҙы, ял итеүҙе маҡсат итеп ҡуям. Әйткәндәр бит: янған усаҡ менән аҡҡан һыуға сикһеҙ ваҡыт буйына ялыҡмай ҡарарға була, тип. Ысынлап та, берәй урман шишмәһенең сылтырауын тыңлап, оҙаҡ-оҙаҡ уйланып ултырырға яратам. Был күңелде таҙарта, уйҙарҙы сафландыра, ҡала ығы-зығыһынан юғарыраҡ булырға ярҙам итә.

**Әйткәндәй, ошо матур яҙғы көндәрҙә доктор Илдар Һиҙиәтовҡа 50 йәш тулды. Уны редакциябыҙ һәм күп һанлы гәзит уҡыусыларыбыҙ исеменән ихлас ҡотлайбыҙ! Эшендә яңынан-яңы үрҙәр, һаулыҡ, ғаилә бәхете теләйбеҙ.**

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**әңгәмәләште.**

БЫЛ - ГОНАҺ!



# КЕШЕЛӘРҘЕ АЛДАП...

## дәүләт менән идара итеү

Ҡөрьән-Кәримдә "Шура" сүрәһенең 42-се аятында "Кешеләргә золом ҡылыусыларға, нахаҡҡа Ер йөҙөндә яуызлыҡ эшләүселәргә ҡаршы юл - улар өсөн интектергес ғазап!" тиелә.

Аллаһ илсеһе әйтә: "Һеҙҙең һәр берегеҙ көтөүсе һәм һәр берегеҙ үҙ көтөүенә яуаплы".

"Алдашыусы беҙҙең аранан түгел".

"Ҡиәмәт көнөндә йәберләүсе ҡараңғылыҡта булыр".

"Хаким ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, әгәр үҙенең артынан эйәреүселәрҙе алдай икән, тамуҡта буласаҡ".

"Йәмғиәт менән идара итергә ҡуйылып, уларға яҡшы мөнәсәбәттә булмаған һәр етәксегә Аллаһ ожмахты ябып ҡуя".

"Ҡиәмәт көнөндә ун кеше менән дә идара итеүсе хөкөм алдына ҡулдары муйынына бәйләнгән килеш килеп баҫыр. Әгәр ул ғәҙел булған булһа, ҡотолор, әгәр зарар килтергән булһа, зыян күрер".

"Эй, Аллаһым! Минең өммәтемдең ниндәй ҙә булһа эше йөкмәтелгән кешегә итәғәтле бул һәм ул уны еңеллек менән башҡарыр. Ауырлыҡ тыуҙырыусыларға ауырлыҡ менән яуап ҡайтар".

"Тиҙҙән гонаһлы һәм йәберләүсе хакимдар барлыҡҡа килер. Уларҙың ялғанын раҫлаусы, уларға яуызлыҡ ҡылырға ярҙам итеүсе -

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ



# ШАЙТАН ХӘЙЛӘЛӘРЕ



## Күренмәгән дошмандарҙан абай бул

Шулай итеп, минең бөтә теләктәрем дә үтәлде.

"Һәм һинә бөтәһе лә бирелде" - тип бойорҙо Раббым... Һәм мин үҙемдең был хәлем менән бик ғорурланам.

Тағы ла... Шуны өҫтәргә теләйем: һинең артыңдан эйәреүселәргә ҡарағанда, минең артымдан эйәреүселәр күпкә күберәк.

Бына шулай... Ҡиәмәт көнөнә тиклем кешелектең күп өлөшө минең артымдан эйәрәсәк.

Һуңынан Иблис бына нимә тураһында һөйләне:

- Минең Атема исемле улым бар. Әгәр берәй кеше намаҙ ҡылмайынса йоҡларға ятһа... ул уның ҡолағына барып, эшен бөтөрәсәк... Әгәр улар быны белһә, намаҙ ҡылмайынса йоҡларға ятмаç ине.

Тағы ла минең Мутакази исемле улым бар... Уның вазифаһы - йәшерен эшләнгән яҡшы эштәрҙе асып күрһәтеү. Мәҫәлән, әгәр бер ҡол йәшерен рәүештә яҡшы эш эшләһә һәм быны кешеләр алдында асырға теләмәһә... Мутакази уның эштәрен кешеләргә еткерергә һәм был турала хәбәр таралыуына булышлыҡ итәсәк.

Һөҙөмтәлә Аллаһы Тәғәлә ҡолона эшләнгән эше өсөн бер генә әжерен бирәсәк, ә туҡһан туғыҙы иҫәпкә алынмаясаҡ, сөнки күрһәтмәй эшләнгән изге эштәргә генә йөҙ сауап яҙыла.

Минең Кухайл исемле тағы бер улым бар. Уның вазифаһы - кешеләрҙең күҙҙәрен томалау, бигерәк тә ғалимдарҙың йыйылышында һәм вәғәҙҙәр (хөтбәләр) ваҡытында. Уға тик кемдеңдер күҙҙәренә ҡағылыу ғына етә, теге ҡалтырана башлай. Ул кеше артабан ғалимдың һүҙҙәрен тыңламаясаҡ һәм үҙенең изге йыйылышҡа килеү сауабынан мәхрүм ҡаласаҡ.

Артабан Иблис шулай тине:

-Ниндәй ҙә булһа ла ҡатын... ултырған урынынан торһа, уның урынына шайтан ултыра.

Тағы ла... Һәр ҡатындың күкрәгендә шайтан ултыра. Һәм ҡатынға ҡараусылар булғанда ул уны биҙәп күрһәтәсәк. Һуңынан ҡатынға, мәҫәлән, "Ҡулыңды асып күрһәт", тигәнерәк һүҙҙәр шыбырлай башлаясаҡ. Шыбырлау теге ҡатын үтәрлек итеп башҡарыла һәм ул ҡулын асып күрһәтә. Ә артабан шайтан үҙенең тырнаҡтары менән уның оялыу һәм ғиффәтлек пәрҙәһен йыртып ташлаясаҡ...

Һүҙ аҙағында Иблис Аллаһ Бәйғәмбәренә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең хәлен һөйләне:

- О, Мөхәммәт, кемделер тура юлдан тайпылдырыр өсөн минең бер ниндәй ҙә мөмкинлегем юҡ. Мин тик ҡайһы бер нәмәләрҙе матур итеп күрһәтәм генә... Шул ғына...

Әгәр минең ундай мөмкинлегем булһа, мин "Аллаһтан башҡа илаһ юҡ һәм Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уның Бәйғәмбәре" тип әйткән, ураҙа тотҡан, намаҙ уҡыған һәр кешене иманһыҙлыҡҡа төшөрөр инем.

Шулай уҡ, о, Мөхәммәт, кешеләрҙең хаҡ юлдан барыуы һинән дә тормай. Һин тик Аллаһтың Илсеһе генә. Һәм һинең вазифаң - кешеләрҙе Исламға өндәү.

Әгәр кешеләрҙе иманға килтереү һинең ҡулыңда булһа, Ер йөҙөндә бер ҡафыр ҙа (инанмаусы) ҡалмаç ине.

Һин - әгәр кеше гонаһ ҡылһа, уға ҡаршы дәлил. Ә мин - намыҫһыҙлыҡ таратыусы кешеләргә сәбәп.

Иманлы кеше әсәһенең ҡарынында уҡ - иманлы. Енәйәтсе әсәһенең ҡарынында уҡ - енәйәтсе.

Тик Аллаһы Тәғәлә генә кемдәр бәхеткә эйә икәнен билдәләй... Һәм тик Ул кемдәр енәйәтсе булырын билдәләй.

Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм):

**"Ә улар ҡаршылашыуҙан туҡтамай. Раббының рәхимлек күрһәткәндәренән башҡаһы" ("Һуд", 11/119). "Аллаһ Үҙенең әүәлгеләре ҡуйған йолаһы буйынса, бәйғәмбәргә тәртип билдәләгән икән, унда бәйғәмбәрҙең гонаһы юҡ. Алланың әмере алдан яҙған яҙмыш булды" (Әл-Әғзәб", 33/38), - тип ике изге аят уҡыны.**

Артабан Бәйғәмбәр Иблискә мөрәжәғәт итте:

- Эй, Абу Мурра! Ысынлап та, һинең тәүбә итеүең һәм Аллаһы Тәғәләгә ҡайтыуың мөмкин түгелме? Мин һинең ожмахҡа инеүеңде һораясаҡмын... Һүҙ бирәм...

Быға Иблис:

-Эй, Аллаһ илсеһе! Бөтәһе лә билдәләнгән әмер буйынса башҡарылды. Хәҙер инде был әмер яҙылған яҙыу ҡараһы бөткән инде... Ҡиәмәт көнөндә нимә булырға тейеш булған, шул буласаҡ.

Һине бәйғәмбәрҙәрҙең иң бөйөгө итеп яралтыусы, һине ожмахҡа инеүселәрҙе дингә өндәүсе итеп тәғәйенләүсе һәм һине иң һөйөклө итеүсе; һәм мине - бөтә енәйәтселәрҙең һәм тамуҡ әһелдәренең башлығы итеүсе - ул Аллаһ. Һәм Ул бөтә нәмәнән дә өҫтөн.

Иблис үҙенең һөйләүен былай тип тамамланы:

-Бына шулай. Ошоноң менән бөтәрәм... Һинә һөйләгәндәремдә мин тамсы ла алдашманым".

**Әл-Әүүәли, Әл-Әхиру, Әз-Заһиру, Әл-Батыну булған Аллаһы Тәғәләгә маҡтауҙар яуһын!**

**Беҙҙең Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙгә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм), уның яҡындарына һәм сәхәбәләренә (райиаллаху анхум) сәләм булһын! Амин!**

**Аллаһы Тәғәләнең бөтә бәйғәмбәрҙәренә һәм илселәренә (ғәләйһимуссәләм) сәләм булһын!**

***Әлхәмду лилләһи раббил-ғәләмин!..***

беҙҙең аранан түгел, һәм беҙ улар араһынан түгел, һәм улар бер ҡасан да сығанаҡтан эсмәҫтәр".

"Әгәр яуызлыҡ ҡылынған ниндәй ҙә булһа халыҡта гонаһлыларҙы төҙәтеүсе тәҡүәле кешеләр табылмаһа, Аллаһ уларҙың бөтәһен дә язалар".

"Ике төркөм кешеләр минең шәфәғәтемә ирешмәйәсәк:

- зарар килтереүсе һәм ғәҙел булмаған етәкселәр;

- башҡа ҡарашлы динде тотоусы, мосолман етәкселәренә ҡаршы таныҡлыҡ биреүсе һәм уларҙан ситләшкән кеше".

Абү Сәйет әл-Худри Аллаһ илсеһенең былай тип әйткәнен еткерә: "Ҡиәмәт көнөндә ҡаты күңелле һәм аяуһыҙ имам иң ҡаты язаға тарттырыласаҡ".

Икенсе бер хәҙистә: "Эй, кешеләр! Хуплаулы эштәргә саҡырығыҙ, хупланмағандан тыйылығыҙ, юғиһә, һеҙ доға ҡылырһығыҙ, ә доғағыҙға яуап булмаç, тәүбә итерһегеҙ, тәүбәләрегеҙ ҡабул булмаç. Йәһүдтәрҙең раввиндары һәм христиандарҙың монахтары "амр биль-маруф, нахий аниль мункар" (хупланған эштәргә саҡырыу, хупланмағандарынан тыйылыу) вазифаһын үтәүҙән тыйылыу менән Аллаһ йәһүдтәрҙе һәм христиандарҙы Үҙенең бәйғәмбәрҙәр теле менән ҡарғаған. Шулай уҡ уларҙың бөтәһен дә язалаған", тип әйтелә.

Был темаға ҡағылған тағы ла бер нисә хәҙисте килтереп үтергә мөмкин:

"Кем беҙҙең диндә булмаған ниндәй ҙә булһа яңылыҡты башҡара, шул ситләтеләсәк", - тигән.

"Үҙе йәлләй белмәүселәрҙе Аллаһы Тәғәлә лә йәлләмәйәсәк".

"Үҙенең өҫтөнә мосолмандар эштәренең яртыһын алып, уларҙы үтәргә һәм улар өсөн һаҡлаусы-фәрештә булырға тырышҡан, ә һуңынан улар менән бергә ожмахҡа инмәгән хаким юҡ".

"Аллаһы Тәғәлә мосолмандарҙың ниндәйҙер эшендә баш итеп ҡуйһа һәм ул мосолмандарҙың ихтыяжына һәм мохтажлығына ҡаршы төшһә, Ҡиәмәт көнөндә Аллаһ шулай уҡ уның менән ихтыяждары һәм мохтажлыҡтары араһына кәртә булып торор".

"Ғәҙел имам Ҡиәмәт көнөндә Аллаһы Тәғәләнең күләгәһендә булыр".

Аллаһ илсеһе: "Һеҙ уны, ә ул һеҙҙе күралмаған, һәм һеҙ уны, ә ул һеҙҙе ҡарғаған хаким насарҙарҙың да насарылыр", - тип әйткән. Шул ваҡыт унан: "Эй, Аллаһ илсеһе! Беҙгә уның менән көрәшергә кәрәкме?" - тип һорағандар. Ул: "Һеҙҙең менән намаҙ ҡыла икән - юҡ", - тип яуап биргән.

Аллаһ илсеһе Аллаһы Тәғәлә өс кеше менән һөйләшмәйәсәк, тигән һәм улар араһында алдаҡсы етәксене лә атап үткән.

Аллаһ илсеһе былай тигән: "Ысынында, һеҙ етәкселеккә ынтылаһағыҙ. Ләкин Ҡиәмәт көнөндә бының өсөн үкенерһегеҙ".

"Аллаһ менән ант итәм, беҙ етәксе итеп үҙе булырға һораған йәки теләгән кешене ҡуймайбыҙ".

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Йомарт бул

**Бөтә цивилизациялар ҙа тиерлек филантропияның теге йәки был төрөн тәжрибәлә ҡулланған. Боронғо йәмғиәттәрҙең күбеһе үҙ халҡына фәҡирҙәр мәнфәғәтендә дисәтинә йәки һалым йөкләмәһе һалған. Египетлылар һәм гректар аҡсаларын китапхана һәм университеттар төҙөү өсөн сарыф иткән. Урта быуаттарҙа сиркәү хеҙмәткәрҙәре дисәтинә килеме ярҙамында дауахана һәм приюттарҙы аҫраған.**

"Дисәтинә" һүҙе теотха тигән инглиз-саксон һүҙенән "дүрттән бер өлөш" тигәнде аңлата. Ошонан сығып, "дисәтинә индереү" мөлкәттең ундан бер өлөшөнә йәки бер кешенең йыллыҡ килеменә һалым түләтеү, тигәнде күҙ уңында тота ла инде. Күптәр дисәтинә биреп, Аллаһты данлайбыҙ һәм ожмахта үҙенә урын әҙерләйбеҙ, тип иҫәпләй. Кембриджҙағы Король колледжы часовняһы эсендә Уильям Вордсворттың түбәндәге һүҙҙәре яҙылған: "Нимә бирә алаһың, барыһын да бир; Бөйөк Көс ваҡ иҫәпләүҙәр менән шөғөлләнмәй". Иман нигеҙе - ул тормош муллығынан ни тиклем күберәк өлөш сығарһаҡ, беҙгә был ерҙә һәм күктә тейешле булғанын аласаҡбыҙ, тигән һүҙ.

Бенджамин Франклин тарихҡа дәүләт эшмәкәре булараҡ ҡына түгел, ә дисәтинә түләүсе булараҡ та инеп ҡалған. Джордж Вашингтон Франклинға 1789 йылда былай тип яҙған: "Әгәр һеҙҙе мәрхәмәтлелегеҙ өсөн һанлаһалар, талантығыҙ менән һоҡланһалар, патриотизмығыҙ өсөн ихтирам итһәләр, мохтаждарға ярҙам күрһәткәнегеҙ өсөн яратһалар, тимәк, ғүмерегеҙҙе бушҡа үткәрмәгәнегеҙҙе белеп, йыуаныс табырға тейешһегеҙ". Үҙенең әйткән васыятын иҫтә тотоп, Франклин филантропик маҡсаттарҙа Бостон һәм Филадельфия ҡарамағына бишәр мең доллар (ул ваҡыт өсөн ҙур ғына сумма) аҡса ҡалдырған. Уның тарафынан шулай уҡ Америкала тәүге ҡала дауаханаһы етем һәм меҫкендәрҙе ҡарау өсөн Пенсильвания госпиталенә нигеҙ һалына.

Эндрю Карнеги байлығының күпселек өлөшөн мәҙәни, белем биреү һәм фәнни учреждениелар ойоштороу өсөн тотонған. Ул "артыҡ байлыҡ йәмғиәт мәнфәғәте өсөн ҡулланылырға тейешле изге милек", тип иҫәпләгән. 1901 йылда Карнегиҙың милке 500 миллион долларҙы тәшкил иткән, шуның 350 миллионын ул йәмғиәттәге төрлө мохтажлыҡтар өсөн тотонған. Уның йомартлығы арҡаһында бөтә донъяла 2500 китапханаға, Нью-Йорктағы билдәле Карнеги-Холға, Питсбургтағы Карнеги-Меллон университетына һәм Вашингтондағы Карнеги институтына нигеҙ һалынған. Карнеги: "Индивидуаллек дәүере дауам итәсәк, әммә миллионерҙар ярлыларҙың опекундары булырға тейеш. Улар ваҡытлыса дөйөм йәмғәт байлығы үсешенең күпселек өлөшөн үҙ идараһына алып, уның менән йәмғиәт мәнфәғәте өсөн йәмғиәттең үҙенә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ идара итә аласаҡ", - тип әйткән.

